*✓ Иң әүүәле Аллаһыбыҙ һүҙ биргәндәр,*
*Һүҙҙе һүҙгә теҙер өсөн тел биргәндәр;*
*Һүҙе барҙың үҙе бар, тип, күҙе бар, тип,*
*Һәр ҡәүемгә ерҙе бүлеп, ил биргәндәр.*

*Рәшир ШӘКҮР.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11 - 17 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№32 (502)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡунаҡ -

Хоҙай илсеһе

3





Президент...

Хөкүмәткә үҙе етәкселек итәсәк

4





Боронғо була тороп...

Йәки ҡаҙаҡтарҙың башҡорттарға аптырағаны тураһында

6-7





Төркиҙәр тәрән тамырлы,

улар донъяға дәүләтселек тәжрибәһе биргән

8-9





14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһендә һеҙгә һүҙ бирһәләр, нимә тураһында һөйләр инегеҙ?

***Мәрүә ҒИЛМЕТДИНОВА, БР Мәғариф министрлығының тәрбиә һәм өҫтәмә белем биреү бүлеге начальнигы:*** Уҡытыусыларҙың яңы уҡыу йылы алдынан оло ҡорға йыйылып кәңәшләшеп алыуы, киләсәккә бурыстар билдәләнеүе матур һәм эшлекле йолаларыбыҙҙың береһе, тип ҡарала һәм был сараға быйыл да ҙур әһәмиәт бирелә. Был юлы ул 11 августа Стәрлетамаҡ ҡалаһында үтәсәк. Башҡортостан Президенты тәҡдиме менән быйыл август кәңәшмәһен яңысараҡ үткәреү тәртибе ҡаралды: пленар кәңәшмәнән һуң унда ҡатнашыусылар эште бер нисә эш төркөмөнә бүленгән дискуссия майҙансыҡтарында дауам итәсәк. Район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтарының эш төркөмөндә республика Президенты ҡатнашасаҡ. Хакимиәт башлыҡтары урынбаҫарҙары, мәғариф бүлектәре етәкселәре, һөнәрселек учреждениелары, юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары етәкселәренең һәр ҡайһыһы үҙ төркөмдәрендә эшләйәсәк.

Быйылғы кәңәшмәлә тәрбиә йүнәлешендә балаларҙы һәм педагогтарҙы социалләштереү темаһы буйынса фекер алышасаҡбыҙ. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, тәрбиә эше аша балаларҙы тормошта үҙ урынын тапҡан, талантларын һәм белемдәрен тормошта уңышлы ҡуллана белгән шәхестәр итеп үҫтереү тураһында буласаҡ һөйләшеү. Балаларҙың һәр береһе талантлы, һәләтле. Зәғиф балалар араһынан йә булмаһа ауыр тормош хәлендәге проблемалы ғаиләләрҙән дә хатта таланттар үҫеп сыға, бары тик уларҙы ваҡытында күреп ала һәм үҫтерә белергә генә кәрәк. Бөтә балалар ҙа математик була йәки рус теленән олимпиадала ҡатнаша алмай, шуға күрә ул үҙен башҡа өлкәлә күрһәтә алһын өсөн унын күңеленә ҡыҙыҡһыныу һалырға кәрәк: экология, туризм, спорт, йәш техниктар клубы, тыуған яҡты өйрәнеү... Беҙҙең бурыс - бөгөнгө ҡатмарлы йәшәйеш шарттарында балаға үҙен табырға ярҙам итеү. Тәрбиә өлкәһендәге тағы бер мөһим йүнәлеш - иҫкәртеү эшмәкәрлеге тураһында ла һөйләшеү буласаҡ кәңәшмәлә. Өс йыл элек үҫмерҙәр араһында суицид осраҡтары йышайып киткәйне, быйыл ул, бәхеткә күрә, күпкә кәмене . Социаль педагогтар, психологтар менән район-ҡалаларҙа булыу, тейешле саралар үткәреү, ата-әсәләр менән эшләү һөҙөмтәһен бирҙе. Әйткәндәй, республика күләмендә ата-әсәләр йыйылышын тергеҙеү кәрәклеге үҙен һиҙҙерә. Эште ата-әсәләр советтары төҙөүҙән башларға ниәтләйбеҙ.


**(Дауамы 2-се биттә).**


"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ!

# РУХ ШИШМӘҺЕ БИТ УЛ

**Өфөлә йәшәүсе балалыҡ дуҫым Наилә Үзбәкова бер ваҡыт ҡапыл ғына ниндәй матбуғат баҫмаларына яҙылыуым тураһында һорап ҡуйҙы. Яуабымды ишеткәс: "Кит инде, "Киске Өфө"нө алдырмайһыңмы ни?"- тип аптыраны.**

Ошо ваҡыттан алып "Киске Өфө" гәзитенә яҙылмай ҡалғаным юҡ. Ысынлап та, ул - рухи тәрбиә сығанағы. Һәр һанын оло ҡунаҡ көткәндәй көтөп алам. Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай яҙған һәр бер мәҡәлә аҡыл дәрәжәһенә үҫеп, үтәсәк юлыңа яҡтылыҡ, ынтылышҡа илһам, фәҡәт ыңғай тормош өлгөһө булып тора. Һәр һөйләмде үтәнән-үтә күреп, үткер ҡәләм менән яҙылған мәҡәләләрҙе уҡыуы үҙе бер ғүмер!

Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" тигән яҙмаларындағы психологик торошто яҡшыға үҙгәртеү алымдары һәр кемгә файҙа итә торғандыр. Барса журналистарҙың, яҙыусыларҙың, аҡыл эйәләренең мәргән һүҙҙәре гәзитте мәртәбәле итә. Эйе, халҡыбыҙҙың рух шишмәһе һайыҡмаған икән әле, тигән ҡыуаныс тойғоһо биләй күңелде. Баш мөхәррирргә, коллектив ағзаларына ҡаҡшамаҫ һаулыҡ, оло бәхеттәр, ғаилә бәхете һәм яңынан-яңы уңыштар теләп, барығыҙға ла өләсәй булырлыҡ 77 йәшлек

**Мәүлиҙә ЗАКИРОВА булыр.**

**Учалы районы Илтабан ауылы.**



**✓ Балалар өсөн тәғәйенләнгән аттракциондарға хаҡтарҙың юғары булыуы ла аптырата. Уртаса эш хаҡына йәшәгән өфөләләрҙең балалары бындай урындарға йылына бер-ике тапҡыр ғына барыу мөмкинлеге ала.**



БАШ ЙОРТТА...



# УЙЫН МАЙҘАНЫМЫ,

## әллә һатыу нөктәһе мөһимме?

**Өфөлә ун йылдан артыҡ ғүмер кисерәбеҙ. Беҙҙең Өфө, тәү сиратта, үҙенең йәшеллеге һәм, башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда, таҙалығы менән күҙгә ташланып тора.**

Ыңғай яҡтары менән бер рәттән, һәр ерҙә булған кеүек үк, Өфөнөң дә үҙ етешһеҙлектәре бар. Тәү сиратта, әлбиттә, юлдар мәсьәләһе. Автомобиль юлдары ла, йәйәүлеләр өсөн дә юлдар күп урындарҙа ҡот осҡос. Йәш әсәй булараҡ, көн дә баланы урамға саф һауаға алып сығырға кәрәк, ләкин ошо юлдарҙан коляска этеп барыуҙы иҫкә төшөрәм дә, урамға сығыуҙы кисектерәм. Шулай уҡ коляска менән магазиндарға барыу ҙа оло проблема тыуҙыра, сөнки күп урында коляска менән бөтөнләй индермәйҙәр, ә индергән осраҡта, ул магазиндар коляска мендереү ҡоролмалары менән тәьмин ителмәгән. Шулай ҙа был юҫыҡта ыңғай тенденция күҙәтелә, буғай, сөнки ошо ҡоролмаларҙы ҡуйып йөрөгәндәрен йыш ҡына күҙәтергә тура килә. Барлыҡ йәмәғәт урындары ла кәрәкле ҡоролмалар менән тәьмин ителһә, коляскалы йәш әсәйҙәр ҙә, ғәриптәр ҙә ҙур ҡыуаныс кисерер ине.

Өфөлә берҙән-бер "Ҡунаҡһарай"ҙа ғына балалар уйыны өсөн ҙур лабиринт бар ине, унынһын да алып ҡуйҙылар, ә ҡалғандары бик бәләкәй, һәм өс-дүрт бала уйнағансы, ҡалғандары ҡарап торорға мәжбүр. Балалар яратып уйнаған уйын комплексы урынына сираттағы һатыу нөктәһен урынлаштырыу кем өсөндөр табышлыраҡтыр, әлбиттә, ләкин балаларға уны нисек аңлатаһың? Шулай уҡ балалар өсөн тәғәйенләнгән аттракциондарға хаҡтарҙың юғары булыуы ла аптырата. Уртаса эш хаҡына йәшәгән өфөләләрҙең балалары бындай урындарға йылына бер-ике тапҡыр ғына барыу мөмкинлеге ала. Ә бына йорттар араһында балалар майҙансыҡтарының күпләп төҙөлөүе йәки йүнәтелеүе бик ыңғай күренеш һәм был тенденция артабан да туҡтамаһын ине, тип теләге килә.

Баш ҡалала һәйбәт, заманса эшләнгән, иркен күмәртәләп һатып алыу базаларының күбеһендәге бысраҡлыҡ, һатыусыларҙың (ә улар күп осраҡта беҙҙең халыҡ түгел) тупаҫлығы, тауарҙарҙың нисек етте - шулай урынлаштырылыуы ла күңелде ҡыра. Мәҫәлән, Затон биҫтәһендәге базаны ғына алып ҡарайыҡ. Ундағы һатыусыларҙың ҡайһы берәүҙәре шул тиклем тупаҫ һәм әҙәпһеҙ ҡылана, үҙенде һатып алыусы түгел, ә нимәлер урларға килгән кеше кеүек һиҙә башлайһың. Быға, нисектер, сик ҡуйыу юлын эҙләргә кәрәктер, тигән фекерҙәмен. Ә бына ҡала эсендәге ҙур баҙар һәм һатыу нөктәләрендәге эшмәкәрлек һәйбәт, тип билдәләргә була. Таҙалыҡ, үҙ эштәренә һәм һатып алыусыға иғтибарлы һәм ихтирамлы һатыусылар - барыһы ла күңелгә яҡын.

**Гөлсиә СОЛТАНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһендә һеҙгә һүҙ бирһәләр, нимә тураһында һөйләр инегеҙ?*

***Илшат ӘМИНЕВ, Өфө районы 83-сө һөнәрселек лицейы директоры:*** Беҙҙең лицей республикала ауыл хужалығы белгестәре әҙерләүсе һөнәрселек уҡыу йорттары араһында иң яҡшы бишәү иҫәбендә.Механизатор, водитель, машина-трактор паркын ремонтлау һәм техник хеҙмәтләндереү буйынса мастер, йорт хужабикәһе - хисапсы, ашнаҡсы, йәшелсәсе, машина менән һауыу оҫтаһы кеүек тормош көткәндә бик кәрәкле һөнәрҙәргә өйрәтәбеҙ. Шулай ҙа иң төп һөнәр беҙҙә - умартасылыҡ. Был һөнәр буйынса йыл да 25-30 кеше уҡытып сығарабыҙ. Беҙҙең алдынғы тәжрибәне һәм инновация алымдарын өйрәнеү маҡсатында төрлө ерҙән делегациялар килеп тора. Бына яңыраҡ ҡына Үзбәкстандан килеп киткәйнеләр, тиҙҙән Хакас республикаһынан һәм Яҡутстандан вәкилдәр көтәбеҙ. Тимәк, беҙҙә башҡалар өйрәнерлек тәжрибә бар. Тик бындай аралашыуҙарҙың барыһы ла беҙҙең коллективтың энтузиазмы кимәлендә генә тормошҡа ашырыла. Заманса уҡыу йорто, тип күтәрмәләү, ниндәйҙер ярҙам, матди дәртләндереү тигәнде күргәнебеҙ юҡ. Проблемаларҙы күбеһенсә үҙ көсөбөҙ менән хәл итергә тырышабыҙ, сөнки Өфө районында ауыл хужалығы белгестәрен әҙерләүсе берҙән-бер махсус уҡыу йорто булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, район хакимиәте йә булмаһа башҡа тарафтан ярҙам ҡулы һуҙыусы юҡ. Агросәнәғәт комплексы кадрҙары әҙерләү дөйөм хәстәрлек талап итә бөгөн. Ошоно аңлап етмәү үкенесле. Был йәһәттән бына Туймазы районында эштең өлгөлө ҡуйылыуын билдәләп китер инем. Ҡайһы хужалыҡҡа күпме белгес кәрәк икәнен алдан иҫәпләп, уҡыуҙы тамамлаған егет һәм ҡыҙҙарҙы эшкә урынлаштырыу кеүек мәсьәләләрҙе район башлығы үҙ контроленә алып, шулар буйынса махсус оперативкалар үткәреп, үҙҙәренең лицей коллективына бик ныҡ ярҙам күрһәтә. Был шулай булырға тейеш тә - агросәнәғәт өлкәһе бөгөн беҙҙең кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә бит.

***Булат ЮНЫСБАЕВ, БР Мәғарифты үҫтереү институтының Биология, химия, география уҡытыу теорияһы һәм методикаһы кафедраһы мөдире, биология фәндәре кандидаты:*** Бөгөнгө көндә бөтәһен дә борсоған Берҙәм дәүләт имтихандары тураһында һөйләр инем, сөнки был мәсьәлә мәғариф министрынан башлап бөтәһенә лә: балаларға, уҡытыусыларға, ата-әсәләргә ҡағыла бит. Тәү ҡарашҡа, БДИ-ға сифатлы әҙерлек алып барыу буйынса бөтөн мөмкинлектәр файҙаланыла һымаҡ, ләкин былай тип әйтергә иртәрәк әле, минеңсә. Был мөмкинлектәрҙе мин заманса технологияларҙы, яңы шәхесте үҫтереү технологияларын тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙа күрәм. Ошо өлкәләге һуңғы технологиялар һәм инновациялар ҡаҙаныштары, фәнни-методик тәьминәт етерлек кимәлдә ҡулланылыш тапмай барыбер. Һуңғы йылдарҙа беҙҙең кафедра тарафынан балаларҙың рефлекс кимәлендә үҙ-үҙен баһалау һәм үҫтереү технологияһы ( РОСТ) республикабыҙ мәктәптәре эшмәкәрлегенә әүҙем ҡулланылышҡа индерелә башланы. Был технология уҡыусыларҙың шәхес булараҡ мөмкинлектәрен моделләүгә һәм шуның аша уҡытыу сифатын, айырыуса БДИ һөҙөмтәләрен бермә-бер күтәреү мөмкинлеген бирәсәк. РОСТ - online технологияһын файҙаланып, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеүселәр араһында Хәйбулла, Краснокама районддары, Нефтекама ҡалаһы, Өфөнөң Октябрь районы алдынғыларҙан иҫәпләнә. Ошо технологияның авторы булараҡ, берҙән-бер теләгем шул: башлағанды яртылыҡ юлда ташламай, стандартта ҡаралған алгоритмды боҙоуға юл ҡуймайынса файҙаланырға кәрәк, шунда ғына ул тейешле һөҙөмтәне бирәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**

**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!





## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылырға бер ваҡытта ла һуң түгел. Әгәр ҙә таныштарығыҙ араһында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, әйтегеҙсе уларға: августың 17-нә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башларҙар. Индекс - 50665, дүрт айға яҙылыу хаҡы - 236 һум 16 тин.**

● Шулай уҡ августа 2013 йылдың тәүге яртыһына 2012 йыл хаҡтары менән яҙылырға була икәнен дә иҫкәртеп ҡуябыҙ. Ул квитанцияларығыҙҙы ла редакцияға ебәрә алаһығыҙ. Китаптан да яҡшыраҡ бүләк юҡ, тип иҫәпләйбеҙ һәм июль, августа 2013 йыл өсөн яҙылған 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ. **Шулай итеп, индекс - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың барлыҡ тиерлек мәктәптәре 1 сентябрҙә уҡыусыларҙы ҡабул итергә әҙер. Был хаҡта "Комсомольская правда" гәзите редакцияһында үткән матбуғат конференцияһында республиканың мәғариф министры Әлфис Ғаязов хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, бөгөнгө көндә Башҡортостанда 1666 мәктәп һәм 879 филиал эшләй. Йәй эсендә 641 мәктәптә - төрлө ҡатмарлыҡтағы ремонт, 1016 мәктәптә ғәҙәттәге ремонт үткәрелгән, 775 мәктәп өсөн ҡоралдар һатып алынған. Дөйөм белем биреү системаһын яңыртыу программаһына ярашлы капиталь ремонтҡа 500 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән.

✓ Башҡортостандың 19 районында урман янғыны хәүефе арҡаһында ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелгән. Республика Хөкүмәтенең тейешле бойороғона ҡул ҡуйылған. Төбәктең Әбйәлил, Асҡын, Баймаҡ, Балаҡатай, Белорет, Бөрйән, Ғафури, Дыуан, Ейәнсура, Йылайыр, Ишембай, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Күгәрсен, Мәсетле, Нуриман, Салауат, Учалы һәм Хәйбулла райондарында һуңғы ваҡытта урман янғындары буйынса киҫкен хәл күҙәтелә. Һуңғы ике тәүлектә генә төбәктә 79 гектар майҙан уттан зыян күргән. Янғын хәүефе миҙгеле башланғандан алып Башҡортостанда йәмғеһе 166 урман янғыны теркәлгән, уларҙан 880 гектар майҙан зыян күргән.

✓ "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы XII "Яратам һине..." Төбәк-ара тыуған яҡ тураһында видеоклиптар конкурсының "Ватан яғымлылығы" номинацияһында еңеүсе тип танылды. Республиканың дәүләт телерадиокомпанияһы "Беҙҙең һайлау - бәләкәй Ватан" фондының попечителлек советы рәйесе Юрий Шафраниктың махсус призына лайыҡ булды. Конкурс Төмән өлкәһендә үтте. Унда бөтә илдән бер нисә тиҫтә телекомпания ҡатнашты. "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы эше - "Байсауыл" видеоклибы диплом менән билдәләнде. Жюри ағзалары Өфө видеоклибын иң профессиональ эштәрҙең береһе тип атаны.

✓ Быйыл Өфө ихаталарын ремонтлауға 300 миллион һумдан ашыу аҡса бүленде. Республика бюджеты иҫәбенә яҡынса 170 ихата ремонтланасаҡ. Был хаҡта бөгөн "Ижтимағи электрон гәзит" сайтында үткән онлайн-конференцияла Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко һөйләне. Ул шулай уҡ былтыр 700-гә яҡын ихата ремонтланыуы хаҡында әйтте.

✓ *Хоҙай ҡунаҡты беҙгә игелекле изге йән булған өсөн түгел, беҙҙең ихласлыҡ, изгелек, мәрхәмәтлек, сабырлыҡ, йомартлыҡ сифаттарын һынар өсөн илсе итеп ебәрә бит.*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ҠУНАҠ -

## Хоҙай илсеһе



**Гәзиттең 29-сы һанында Бөрйән районынан Гөлсөм Өмөтбаеваның "Ҡунаҡсыллыҡ яҡшы, тик күстәнәсһеҙ ҡунаҡ йәмһеҙ", "Ашау-эсеү тиҙ онотола" тигән баш аҫтындағы яҙмаларын уҡығас, ҡунаҡсыллыҡ хаҡындағы фекерҙәремде ошо рубрика аҫтында дауам итергә булдым. Гөлсөм ханым яҙмаларында халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығы хаҡында һүҙ алып барып, ҡунаҡты күстәнәс биреп оҙатыуҙың әһәмиәтен бик дөрөҫ аңлата: "Күстәнәс - ҡунаҡтан ҡайтып инеү менән өйҙә ҡалған бала-сағаға тотторол, уларҙың ҡыуанысын күреү, ҡунаҡ табынының ризығын өйҙәгеләргә лә татытыу, ҡунаҡ саҡырған кешенең ихласлығын сағылдырыу ул..." Яҙмаларының икенсе өлөшөндә автор ауыл-ҡала мөнәсәбәтенең сәйер күренешен бәйән итеп, ҡасандыр ауылда ҡунаҡ булыусы ҡала кешеһенең үҙен ҡунаҡ итеүсене ҡала урамында осратҡанында күрмәмешкә һалышып үтеүе, ашап-эсеүен, ҡунаҡ булыуын тиҙ онотоуы хаҡында әйтеп үтә. Бик хаҡ һүҙҙәр. Был йәһәттән минең дә бер күҙәтеүем бар: ҡалалар ҙурыраҡ, мегаполис киңерәк булған һайын, унда йәшәүселәрҙең дә күңеле тарыраҡ була бара, йәғни мөхит ни тиклем киңәйһә, кеше үҙ-үҙенә шул тиклем нығыраҡ бикләнә. Ҡыҫҡаһы, ҡунаҡ, ҡунаҡлашыу, ҡунаҡсыллыҡ хаҡында киңерәк итеп фекер йөрөтөп ҡарайыҡ...**

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында ҡунаҡ, ҡунаҡлашыу, ҡунаҡсыллыҡ хаҡындағылары иң күптәренең береһен тәшкил итә, тиһәм, һис тә яңылышмам. Уларҙың бер нисәүһен әйтеп үтергә лә булалыр, әйтәйек: "Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар", "Ҡунаҡ барҙа этеңде лә орошма", "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", "Ҡунаҡ килһә, ит бешә, ит бешмәһә, бит бешә", "Ҡунаҡ килһә - мәшәҡәт, үҙең барһаң - рәхәт", "Ҡунаҡ килһә, һый килә", "Ҡунаҡ ҡунаҡтан оло", "Ҡунаҡ үҙ ризығы менән килер", "Ҡунаҡ - хужаның ишәге", "Ҡунаҡҡа барһаң, ҡаҙаныңды йыуып кит", "Ҡунаҡтың аты ла ҡунаҡ", "Ҡәҙерле ҡунаҡ һағындырып килә", "Бәхетленең ҡунағы бергә", "Ҡунаҡ менән әжәл һорап килмәҫ", "Ҡыҙ бала ҡунаҡ ҡына", "Саҡырып ҡунағың килмәһә, ҡыйын, ауырып ҡатының үлмәһә, ҡыйын", "Үлем - һәр кешенең ҡунағы", "Әҙәпле ҡунаҡ китер ваҡытын үҙе белер", "Оялсан ҡунаҡ ас ҡалыр", "Өс көн - ҡунаҡ, өс көндән һуң - муйнаҡ", "Саҡырылмаған ҡунаҡ - юнмаған таяҡ", "Саҡырылмаған ҡунаҡ уғрынан яман", "Төнгө ҡунаҡ - төнлөк ябыуы", "Хужа ҡунағын яратмаһа, бесәйен әрләй", "Һөмһөҙ ҡунаҡ ҡуна ҡалыр, хужаларға нужа һалыр" һ.б.

Күреүебеҙсә, ҡунаҡ, ҡунаҡлашыу, ҡунаҡсыллыҡ хаҡында төрлө-төрлө характерҙағы мәҡәл-әйтемдәр бихисап икән. Бында әле мин "Башҡорт халыҡ ижады"ның X томындағы ("Китап", 2006 йыл) мәҡәл-әйтемдәрҙең иң аҙ өлөшөн генә миҫал китеп килтерҙем. Миңә ҡалһа, был хаҡтағы ҡанатлы һүҙҙәр араһындағыларының иң кәттәләре, моғайын да, "Ҡунаҡ - Хоҙай илсеһе", "Беҙ был донъяла ҡунаҡ ҡына" тигәндәрелер. Тик, ниңәлер, халыҡ араһында киң таралған был әйтемдәр томлыҡҡа инмәй ҡалған. Бәлки, улар китаптың башҡа тематик бүлектәрендә урын алғандыр, тип ышанғы килә.

Борон-борондан ҡунаҡсыллыҡ барлыҡ халыҡтарҙа ла иң күркәм йола һаналған. Татлы ризыҡ, аш-һыуҙан һығылып торған мул табын бар кешегә оҡшаған кеүек, ҡунаҡсыллыҡ сифаты ла һәр кеше өсөн яҡындыр, кешелеклелек, изгелек, мәрхәмәтлек, йомартлыҡ сифаттары менән бер тигеҙ итеп баһаланалыр, тип ышанғы килә. Әммә һәр бер ҡунаҡтың да Хоҙай илсеһеләй изге йән булмауы ла бар бит әле. Нимә генә тимә, ҡунаҡтарҙың да төрлөһө була. Улай булғас, ниңә ҡунаҡтарҙы Хоҙай илсеһенә тиңләгәндәр һуң? Ошо урында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың бер исемһеҙ шиғырынан ошо юлдарҙы килтереп үтке килә:

*Боронғоноң йолалары*
*ҡыҙыҡ:*
*Изге булған ҡунаҡ ул саҡта.*
*Хатта дошман өйгә килеп*
*керһә,*
*Теймәгәндәр ундай ҡунаҡҡа.*

*Бары менән уны*
*һыйлағандар,*
*Һоло килтергәндәр атына.*
*Тик ауылдан ҡунаҡ*
*сығыу менән*
*Ир-егеттәр,*
*яҡшы атҡа менеп,*
*Ҡыуа төшкән*
*дошман артынан...*

Бер яҡтан ҡарағанда, кешене ике йөҙлө, яһалма рәүештә яғымлы, игелекле булырға мәжбүр итеүҙе хәтерләткән кеүек ҡунаҡсыллыҡтың был йолаһы. Ә бит ҡунаҡсыллыҡтың нигеҙендә өйөңә ҡунаҡ булып килгән һәр кешегә ҡарата йылы, яҡты, йомарт мөнәсәбәт күрһәтеү ята. Әгәр ҙә ҡунағың ундай мөнәсәбәткә лайыҡ булмаһа, йәғни дошманың булһа, ни эшләргә һуң? Уға яҡты йөҙ күрһәтеү, атының теҙгененән алып ҡаршылап, түреңә мендереп ултыртып һыйлау бер ҡатлылыҡты, үҙ булмышыңа, асылыңа, яҙмышыңа ҡарата битарафлыҡты, үҙеңә зыян булып әйләнеп ҡайтырға булышлыҡ иткән хушкүңеллелекте аңлатмаймы? Халҡыбыҙҙың бындай сифатын хәҙерге заманда ыштаһыҙлыҡҡа, вайымһыҙлыҡҡа тиңләүселәр ҙә бар. Йәнәһе, ауыҙын аcһа, үпкәһе күренеп торған бер ҡатлы башҡорт һаман да ҡунағының алдына барлыҡ мөлкәтен сығарып, нисек булһа ла уны һыйлап, күңелен күреп ҡалырға тырыша...

Беҙҙең халыҡта ҡунаҡҡа бындай мөнәсәбәт ҡунаҡтың үҙенә түгел, Хоҙайға тоғро булғаныбыҙ өсөн һаҡланып киләлер, тип ышанғы килә барыбер ҙә. Ысынлап та, ни өсөн ҡунаҡ Хоҙайҙың илсеһе һуң? Хоҙай ҡунаҡты беҙгә игелекле изге йән булған өсөн түгел, беҙҙең ихласлыҡ, изгелек, мәрхәмәтлек, сабырлыҡ, йомартлыҡ сифаттарын һынар өсөн илсе итеп ебәрә бит. Изгеһен дә, яуызын да берҙәй үк итеп ебәрә. Ошо юл менән беҙҙе һынай һәм сауабын да бирә. Мин, мәҫәлән, халҡыбыҙ ҡунаҡсыллығының дәлил менән аңлатып булмаҫлыҡ сәбәптәрен ошонда күрәм. "Ҡунаҡ - Хоҙай илсеһе" тигән әйтем тап ошо хаҡталыр, тием. Яңылыш уйлаһам, зинһар, мине төҙәтегеҙ.

Улай булғас, "Саҡырылмаған ҡунаҡ уғрынан яман", "Төнгө ҡунаҡ - төнлөк ябыуы", "Хужа ҡунағын яратмаһа, бесәйен әрләй", "Һөмһөҙ ҡунаҡ ҡуна ҡалыр, хужаларға нужа һалыр" тигән әйтемдәрҙе нисек аңлатырға була, тип әйтер бәрәү. Кем белә, бәлки, был әйтемдәрҙе ҡунаҡлашыуҙы, ҡунаҡ итеүҙе яратмағандар уйлап сығарғандыр. Нимә генә тимә, "ҡунаҡ" һүҙенең тамырында "ҡун", "ҡуныу" йәғни "йоҡлап сығыу" һүҙҙәре ята. Ҡунаҡ ул иң беренсе нәүбәттә ҡуна килеүсе кеше. Беҙ бәләкәй саҡта атай-әсәйҙәрҙең нисек итеп ҡунаҡ саҡырышып, гөрләшеп йәшәүҙәрен күреп үҫтек. Әйтәйек, бер ауылда бер өй аша ғына йәшәгән егет менән ҡыҙ өйләнешһә, тәүҙә әйттерергә килеп, өс көн буйына ҡунаҡ булаинеләр, мал алырға килгәндә лә өс көн буйы ҡунаҡлашалар. Туйҙар дүрт көн бара: тәүге көн - ҡыҙыл туй, икенсе көн - йыуаса, өсөнсө көн - сыбыртҡы ите, дүртенсе көн - ҡыҙ оҙатыу һәм кейәү йортонда ҡыҙ ҡаршылау. Шулай итеп, егет менән ҡыҙҙың өйләнешеү мәшәҡәттәре ун көнгә һуҙыла торғайны. Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡунаҡ булып килеүселәрҙе, бер өй аша ғына йәшәһәләр ҙә, өйөнә ҡайтып килергә лә юл ҡуймай инеләр. Хәҙер инде, заман башҡа, заң башҡа, ҡайһы бер туйҙар иң күбендә 1-2 көндә тамамлана. Беҙ, малайҙар иһә, апайҙарыбыҙҙың туйына килгән ҡоҙаларҙың атын ҡарау, һуғарыу, бесән, һоло һалыу менән булдыҡ. Ҡунаҡтың йәки ҡоҙаның аты ихатаға инеүе була, хужаның аты ялан кәртәгә сығарылып, әүеҫлек аҫтына индерелеп ҡуйыла, септә лә ҡунаҡтың атына ябыла ине. Ҡунаҡтың аты ла ҡунаҡ ине шул ул заманда.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы киләһе һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ 25-26 августа Өфөлә "Аҡбуҙат" алдындағы асыҡ майҙанда "Башҡортостан - Рәсәйҙең баллы иле" фестивале үтә. Фестиваль программаһы сиктәрендә 25 августа XII Республика умартасылар конкурсы, VI "Йәш умартасы" республика конкурсы һәм "Баллы Башҡортостан" күргәҙмә-йәрминкәһе ойоштороla. Фестивалде асыу тантанаһы 25 августа 10 сәғәттә башлана.

✓ 2012 йылдың 1 июленә ҡарата хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме республикала 8610,5 һум тәшкил итте. Федераль дәүләт статистикаһы хеҙмәтенең БР буйынса территориаль органы (Башҡортостанстат) мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта төбәктә 1,075 миллиондан ашыу пенсионер йәшәй, уларҙың 308 меңдән ашыуы хеҙмәт эшмәкәрлеген дауам итә.

✓ Ағымдағы йылдың тәүге алты айында дәүләт һәм муниципаль учреждениелар хеҙмәткәрҙәренең уртаса айлыҡ эш хаҡы 2011 йыл менән сағыштырғанда 11,5 процентҡа артты һәм 12999,8 һум тәшкил итте. Республиканың дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 10,2 процентҡа артып, хәҙер 14501,9 һум тәшкил итә, муниципаль учреждениелар хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы иһә 12 процентҡа артты (11985 һум). Мәғариф өлкәһендә эш хаҡы 11,7 процентҡа артып, 11988 һум тәшкил итте, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә - 13,6 процентҡа (16071 һум), мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларында - 9,4 процентҡа (9429 һум), социаль сәйәсәт өлкәһендә - 6,4 процентҡа (9550 һум), йәштәр сәйәсәте өлкәһендә - 10,2 процентҡа (8746 һум) һәм спорт өлкәһендә 6 процентҡа артты (10099 һум).

✓ Башҡортостанда 2012 йылдың 1 августынан 2013 йылдың 1 августына тиклемге осорға һунар ресурстарын аулауға лимит билдәләнде. Документҡа ярашлы, федераль әһәмиәттәге айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәләренән тыш, республиканың барлыҡ территорияһында һунар рөхсәт ителде. 2013 йылдың 1 августына тиклем һунар ресурстарын аулауҙың максималь лимиты түбәндәгесә: мышы - 803 баштан, ҡоралай - 614, ҡабан - 2901, һоро айыу - 104 һәм бурһыҡ 181 баштан артмаҫҡа тейеш.

✓ Аграрийҙар быйыл 55 мең тонна күләмендә күсмә страховка фондын булдырырға тейеш. Был фонд былтыр башлап ойошторолғайны. Быйыл был практика дауам ителәсәк. Залог операциялары механизмы 23 июлдән эш башлай. Был фонд ауыл эшсәндәре өсөн финанс хәүефһеҙлеге гарантияһы булып тора.

**"Башинформ"дан.**

✓ *"Башҡортостан Уралы" 345,7 мең гектарҙан ашыу майҙанды биләй. Уның составына федераль һәм республика кимәлендәге айырыуса һаҡланған тәбиғәт территориялары инә.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӘБИҒӘТЕБЕҘ...

## ышыҡҡа инә

**"Башҡортостан Уралы" биосфера резерваты Бөтә донъя биосфера ҡурсаулыҡтары исемлеген тулыландырҙы. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, бындай ҡарар Парижда "Кеше һәм биосфера" программаһының Халыҡ-ара координация советы ултырышында ҡабул ителде.**

Әлеге ваҡытта Бөтә донъя биосфера ҡурсаулыҡтары исемлегенә 117 илдә урынлашҡан 599 объект инә. Республикала "Башҡортостан Уралы" биосфера резерватын булдырыу буйынса эштәр 2011 йылда башланғайны. Ул ваҡытта төбәктең Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Биология институты, "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, "Башҡортостан"милли парклы тарафынан объектҡа "Башҡортостан Уралы" биосфера резерваты статусын биреүгә ғариза әҙерләнгәйне.

БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында әйтеүҙәренсә, республикалағы был уникаль тәбиғи-мәҙәни комплексты әлеге исемлеккә индереү уны һаҡлап ҡалыуҙа һәм популярлаштырыуҙа ҙур роль уйнаясаҡ. Бынан тыш, был Башҡортостандың ЮНЕСКО ойошмаһы менән артабан хеҙмәттәшлек итеүенә импульс бирәсәк.

"Башҡортостан Уралы" 345,7 мең гектарҙан ашыу майҙанды биләй. Уның составына федераль һәм республика кимәлендәге айырыуса һаҡланған тәбиғәт территориялары инә. Улар - "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы, "Башҡортостан" милли паркы, "Мораҙым тарлауыҡы" тәбиғәт паркы, "Алтын Солоҡ" тәбиғи зоологик заказнигы һәм "Ыҡ" зоологик заказнигы.

# БЕЛЕШМӘ АРТЫНАН...

## йүгермәһәң дә була

**Шундай заманда йәшәйбеҙ: заманса технологиялар, әгәр уларҙың "телен" аңлаһаң, бик күп ваҡытыңды һәм нервыңды һаҡлауға ярҙам итә.**

Әле бына республиканың өс урынында - Яңы күпер урамында, Өфө һәм Иглин райондарында урынлашҡан Күп функциялы үҙәк (МФЦ, яҙайлаштырып әйткәндә, "берҙәм тәҙрә") халыҡтың алтынға бәрәбәр ваҡытын оҙон сираттарҙа әрәм иттермәү мөмкинлеге тыуҙырҙы. Ниндәйҙер справка йәки пособие артынан ишектән-ишеккә йөрөргә кәрәкмәй, бары тик МФЦ-ға килеп, ғариза яҙаһың да, билдәләнгән ваҡытта әҙер документты килеп тә алаһың. Тейешле структуралар мәғлүмәтте үҙара алыша. Бының өсөн артыҡ сығымдар ҙа талап ителмәй, бары тик хеҙмәт өсөн билдәләнгән күләмдәге дәүләт пошлинаһын түләү генә кәрәк. Әлеге ваҡытта был үҙәк көнөнә 1000 кешене ҡабул итеү һәм 70 төрлө хеҙмәт күрһәтеү ҡеүәтенә эйә.

2015 йылға тиклем Башҡортостанда Күмертау, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Бәләбәй, Белорет, Октябрьский ҡалаларында шундай үҙәктәр асыу планлаштырыла. Баш ҡаланың һәр районы халҡы инә был хеҙмәт менән киләһе йылдан уҡ файҙалана башлау мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Законға ярашлы, 2015 йылға тиклем МФЦ-лар торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағындағы субсидияларҙы юллауҙан алып сит ил паспорттары эшләүгә тиклем барлыҡ хеҙмәттәрҙе лә тормошҡа ашырырға тейеш. Яңы технологиялар индереү дәүләткә лә файҙалы: ул йылына 500 миллион һум аҡса экономияласаҡ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПРЕЗИДЕНТ...

## Хөкүмәткә үҙе етәкселек итәсәк

**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов бер нисә указға ҡул ҡуйҙы, уларға ярашлы, ул Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән етәкселек итеүҙе үҙ өҫтөнә алды, БР Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры вазифаһын булдырҙы, шулай уҡ БР Хөкүмәте ағзалары араһында вәкәләттәр бүлеүгә үҙгәрештәр индерҙе.**

Индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры бурыстарына республика Президенты ҡушҡан эштәрҙе башҡарыуға контроллек итеү, БР Сәнәғәт һәм инновацион сәйәсәт министрлығы, БР Тарифтар буйынса дәүләт комитеты эшмәкәрлеген координациялау инә.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры вазифаһына Рәүеф Ноғоманов тәғәйенләнде. Ул Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәренең халыҡ-ара саммитын үткәреүгә әҙерлек, шулай уҡ төҙөлөш һәм транспорт мәсьәләләрен контролдә тотасаҡ.

Вице-премьер Сергей Афонин, элеккесә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһе өсөн яуап бирә. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фидус Ямалетдиновҡа БР Мәғариф министрлығы эшмәкәрлеген көйләү бурысы өҫтәлде, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Президентының матбуғат хеҙмәтенән.




БР Хөкүмәтенең киңәйтелгән ултырышында хәбәр ителеүенсә, төбәк башлығы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән етәкселек итеүҙе үҙ өҫтөнә аласаҡ. Шулай итеп, Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Президенты булараҡ республиканың башҡарма власына дөйөм етәкселек итеүҙән тыш, республика Хөкүмәте эшмәкәрлегенә лә идара итәсәк.

Башҡортостан Президенты үҙенең ҡарарын донъя иҡтисадындағы, шулай уҡ республика аппаратындағы кире күренештәргә, Хөкүмәт эшмәкәрлегендә йылдамлыҡ һәм креативлыҡ булмауы менән дәлилләне. Республика Хөкүмәте заманса, йыйнаҡ һәм йылдам булырға тейеш, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул һәм, был үҙгәрештәр Башҡортостандың дәүләт идаралығын реформалаштырыуҙың беренсе этабын билдәләй, тине.

**"Башинформ".**

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҒАЛИМДАР...

## өй туйлай

**Өфөнөң Киров районында баш ҡаланың юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары өсөн торлаҡ йорт сафҡа индерелде. Объектты асыу тантанаһында ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты.**

Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, әлеге йортто төҙөү барышында ҡала властары ер бүлеү һәм инженерлыҡ селтәрҙәренә тоташтырыуҙы тиҙләтеү буйынса мәсьәләләрҙә әүҙем ярҙам иткән.

- Өфө өсөн был мөһим ваҡиға булып тора. Үҙенсәлекле маяҡ булараҡ, ул барлыҡ бизнес-берләшмәгә, беҙҙең тәбиғи монополияларға, предприятиеларға илдәге иҡтисади һәм финанс ауырлыҡтарға ҡарамай, хеҙмәткәрҙәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһен уңышлы хәл итеп булыуын күрһәтә, - тине Ирек Ялалов.

14 ҡатлы һәм 89 фатирлы йортта Өфө дәүләт нефть техник университеты, Өфө дәүләт авиация техник университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты, Башҡорт дәүләт медицина университеты, Башҡорт дәүләт университеты, БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы һәм башҡа юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары йәшәйәсәк. Бындай тәжрибәне артабан да дауам итеү планлаштырыла һәм киләһе йортто Өфөнөң Сәгит Агиш урамында төҙөләүе ихтимал.

2012 йылға күп фатирлы йорттарға капиталь ремонт үткәреү буйынса адреслы программаға ярашлы, Өфөлә Федераль Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды менән эшләү дауам итә. Өфө хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, программаның беренсе этабын өлөшләтә финанслау күләме 429 миллион һум, икенсе этабын өлөшләтә финанслау күләме 16 миллион һум тәшкил итә. Баш ҡалала шулай уҡ күп фатирлы йорт ихаталарына һәм уларға илткән юлдарға капиталь ремонт үткәреү буйынса адреслы программа эшләп килә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓22 августа Өфөлә Мәғарифты үҫтереү институты нигеҙендә "Башҡортостан Республикаһының дөйөм белем биреү учреждениеларының "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" комплексы белем биреү курсын индереүгә һәм тормошҡа ашырыуға әҙерлеге" исемле түңәрәк өҫтәл үтә. Унда республиканың Мәғариф министрлығы, Өфө епархияһы вәкилдәре ҡатнашасаҡ.

✓3-28 сентябрҙә Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты Башҡорт дәүләт аграр университеты менән берлектә яңы эш башлаған эшҡыуарҙар өсөн ҡыҫҡа сроклы белем биреү курстары үткәрә. Курстарға республиканың Архангел, Иглин, Ҡырмыҫҡалы Өфө, Шишмә райондарында йәшәүсе граждандары саҡырыла.

✓Пермь крайының Барҙым районы халҡы Пермь крайы губернаторы В. Басаргинға, Башҡортостан Президенты Р. Хәмитовҡа, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына "Юлдаш" радиоһы һәм "Башҡортостан юлдаш телевидениеһы" таппырыуҙарын тергеҙеүҙә ярҙам итеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итте. 200 кеше ҡултамғаһы менән килгән хатта Барҙым районы ғына түгел, Пермь крайының башҡорттар йәшәгән башҡа райондары халҡы ла, Башҡортостандың уларға сиктәш Тәтешле районы халҡы ла Башҡортостан радиоһын тыңлауҙан һәм телевидениеһын ҡарауҙан мәхрүм, тиелә.

✓"Башҡортостан энциклопедияһы"ның һуңғы 7-се томы баҫылып сыҡты. Унда "Ф-Я" хәрефтәренән башланған материалдар донъя күргән. Был томда 2200-ҙән ашыу мәҡәлә һәм 545 һүрәт урын алған. Баҫмаҙың тиражы 7 мең дана тәшкил итә.

✓ Өфөлә күп балалы ғаиләләр һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр өсөн муниципаль ер участкалары етешмәй. Был хаҡта сайтында үткән онлайн-конференцияла Өфө ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко хәбәр итте. Ер участкалары өҙ булғанға күрә, Өфө хакимиәте өҫтәмә майҙандар эҙләү буйынса эшләй, шул иҫәптән Өфө районына ҡараған майҙандар күҙҙә тотола.

АЛДАЙҘАР!

# "АВТОКРЕДИТ ТӨҘӨРГӘ ЯРҘАМ ИТӘМ..."

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының полиция хеҙмәткәрҙәре тарафынан кредит афералары менән мауыҡҡан енәйәти төркөм ҡулға алынған. Тәүге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, был шикле кешеләрҙән утыҙҙан ашыу граждан зыян күргән.**



"Автокредит төҙөргә ярҙам итәм". Шулай алдаштырған аҡсаға мохтажлыҡ кисереүсе ҡайһы бер кешеләрҙе еңел юл менән аҡса эшләргә теләүселәр. Эске эштәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, бер көн эсендә башҡарылған махсус операция барышында полиция хеҙмәткәрҙәре тарафынан 9 кеше ҡулға алынған, уларҙың эш урындарында һәм йорттарында тентеүҙәр ойошторолған. Закон һағында тороусылар ғәмәлдә булмаған ойошмалар өсөн эшләнгән мисәттәр һәм ялған документтар тапҡан. Клиенттарҙа шик тыуҙырмаҫ өсөн шик аҫтындағы кешеләр хатта офистар өсөн бүлмәләрҙе лә ҡуртымға алған. Был офистарҙа ғәмәлгә ярәҡһыҙ эш кенәгәләре һәм шундай уҡ ялған эш хаҡы алыу тураһындағы белешмәләр табылған.

Бөтә енәйәттәр ҙә бер төрлө атҡарылған: был төркөмгә ҡараған кешеләр йәшәр урыны булмаған граждандар араһынан үҙҙәренә ҡорбан таба һәм, әгәр ул кредитҡа автомобиль алып биреһә, бүләккә аҡса түләргә вәғәҙә итә. Ә кем заемсы роленә тап килмәй, был ролгә уны үҙҙәре индерә, уға ялған эш урыны күрһәтеп, белешмә тоттора, ҡайһы саҡта хатта ялған пропискаға ла ҡуя, ҡыҫҡаһы, "өрмәгән ергә ултыртмай" ғына автокредит алдыралар ҙа, аҙаҡ шым ғына "тишек шымаңға" ултырталар. Ә алданған кешеләрҙең: "Аҡсаһын ҡайтарырға миңә тура киләсәк бит", - тигән дәғүәһенә ҡаршы: "Банк менән килешеү төҙөгәнһеҙ", - тип тынысландыралар. Банкҡа аҡса түләмәгән өсөн ниндәй яза көткәнен онотҡан клиент, шулай итеп, татлы телдәргә ышанып, "болотҡа атланғанын" һиҙмәй ҙә ҡала...

Бөгөнгө көндә был шикле кешеләргә ҡарата алдашыу факты буйынса биш енәйәт эше ҡуҙғатылған. Әлегә тиклемгә эш материалдары буйынса тикшерелгән барлыҡ автомобилдәр ҙә Рәсәй автопромынан. Уларҙы кредит төҙөүҙең икенсе көнөнә үк дәүләт теркәүенән алып, Рәсәйҙең төрлө өлкәләренә, башлыса Кавказ регионына, үҙҙәренең тыуған яғына оҙатҡандар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әгәр һеҙҙе лә ниндәйҙер ыҫпай кейенгән, мөләйем ҡарашлы, алтын тауҙар вәғәҙә иткән кешеләр "эш"тә ҡатнашып ҡарарға өндәй икән, ышанмағыҙ, был кешеләр тураһында яҡындарығыҙ, таныштарығыҙ, юристар менән кәңәшләшегеҙ. Әгәр ҙә инде был кешеләр һеҙҙе лә алдап өлгөргән икән, Эске эштәр министрлығының Иҡтисади хәүефһеҙлек идаралығының ышаныс телефонына түбәндәге һандар буйынса шылтырата алаһығыҙ (347) 124.**

ҺӨЖҮМ ИТӘЛӘР!

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ...

**Такси водителдәрен енәйәтселәр һәм хоҡуҡ боҙоусылар айырыуса "ярата". Уларға һөжүм итеүҙәр, талауҙар хаҡында криминаль мәғлүмәттәрҙә әленән- әле хәбәрҙәр булып тора. Полиция хеҙмәткәрҙәре тарафынан был мәсьәләне хәл итеү өҫтөндә етди эш алып барыла.**

Ләкин һәр кемдең хәүефһеҙлеге - үҙ ҡулында. Шуға күрә үҙ ғүмерҙәре һәм мөлкәттәре хаҡында такси водителдәре үҙҙәре ҡайғыртырға бурыслы. Нисек итеп енәйәтселәр ҡулына эләкмәҫкә? Был йәһәттән полиция, тәү сиратта, заманса техник яңылыҡтарҙы инҡар итмәҫкә саҡыра. Автоһәүәҫкәрҙәр араһында һуңғы ваҡытта яңы мобиль һәм компактлы әйбер - трекер - популярлыҡ яулай. Шырпы ҡабынан саҡ ҡына ҙурыраҡ һәм кеҫәгә еңел һыйған был яйланма таксистарға ла, ябай автоһәүәҫкәрҙәргә лә ҡулай. Ул теге йәки был объекттың ҡайҙа булыуын контролдә тотоусы ҡоролма. Хәүеф янаған осраҡта, "SOS" кнопкаһына баҫыу етә һәм сигнал шул уҡ минутта үҙәкләштерелгән һаҡ хеҙмәтенә бара. Трекер ярҙам һораусының ниндәй адрес буйынса булыуын аныҡ күрһәтә һәм шул урынға тиҙ арала наряд йүнәлтелә.

Шулай уҡ автомобиль хужаларын төрлө хәүефтәрҙән аралаусы булып навигация блогы ла хеҙмәт итергә мөмкин. Уның эшләү рәүеше лә трекер кеүек үк, йәғни автомобилдең барлыҡ координаттарын да спутник системаһы аша яҡшы "күреп" тора.

Был ике приборҙы ла автомобиль хужаһы үҙенә генә билдәле һәм тиҙ арала кнопкаһына баҫа алырлыҡ ергә урынлаштырырға һәм кәрәк ваҡытта ҡулланырға мөмкин.

**Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәренән.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ДАЧАЛА ТЕРКӘЛЕҮ

**"Баҡса йортонда теркәлеүгә рөхсәт бармы?"**

- Бар, әгәр йорт хосуси милеккә күсерелгән, йәғни күсемһеҙ объект булараҡ теркәлгән икән, быны эшләргә мөмкин. Шулай ҙа үҙ баҡсаңда теркәлеүҙең ҡайһы бер ҡыйынлыҡтары бар. Баҡсала теркәлеүҙе тыйып, "Баҡсасылыҡ, йәшелсәселек һәм граждандарҙың коммерцияла булмаған дача берекмәләре тураһында"ғы закон РФ Конституцияһының 27-се һәм 55-се статьяларына ҡаршы килә. 2011 йылда Конституция суды ауыл хужалығы ерҙәрендә теркәлеүгә рөхсәт бирҙе, ләкин был хаҡта әлегә тиклем "баҡса" законына үҙгәрештәр индерелгәне юҡ. Шул сәбәпле, теркәүҙән баш тартҡан осраҡтарҙа урындарҙа кешеләр милке теркәлгән урын буйынса судҡа мөрәжәғәт итә. Суд, Конституция суды ҡарарына нигеҙләнеп, теркәлеү мәсьәләһен хәл итергә тейеш.

## ЮРИДИК ҺӘЛӘТҺЕҘЛЕК

**"Атайыбыҙ бер бүлмәле фатирҙа яңғыҙы йәшәй. Склероз менән яфалана, хәтере юҡ, документтарын, аҡсыларын йыш юғалта. Уның ошондай хәленән файҙаланып, алдап, ҡул ҡуйҙырып, теләһә ниндәй аферистар фатирын һалдырып алмаһын тип ҡурҡабыҙ. Ул сит кеше файҙаһына фатирын васыят итә аламы?"**

- Васыят яҙырҙан алда уның менән нотариус икәүҙән-икәү ҡалып һөйләшә, был ғәмәленең хоҡуҡи эҙемтәләрен аңлата, васыят яҙырға ҡарарының мәғәнәһенә төшөнөүен-төшөнмәүен тикшереп ҡарай. Әгәр нотариусҡа мөрәжәғәт иткән кеше камил аҡылында икән, васыят яҙыу өсөн шул да етә. Ә инде уның килделе-киттеле хәле, шизофреник булараҡ, иҫәптә тороу факты һәм суд тарафынан юридик һәләтһеҙ тип танылыуы асыҡлана икән, уның васыяты йәки төҙөгән килешмәһе законһыҙ тип табыласаҡ. Кешене юридик һәләтһеҙ тип таныу өсөн сәбәптәрен күрһәтеп, уны юридик һәләтһеҙ булараҡ билдәләмә биреүҙе һорап, судҡа ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ә инде кеше үҙе быны теләмәһә, уға мәжбүри тикшереү үткәреү мөмкин түгел. Ахыр сиктә, суд тарафынан кеше юридик һәләтһеҙ тип таныла икән, опека һәм попечителлек органы ризалығынан тыш, уның милке менән эш итеү йәки ниндәйҙер килешеүҙәр төҙөү шулай уҡ мөмкин түгел. Әйткәндәй, һеҙ өлкән йәштәге атайығыҙҙың опекуны була алаһығыҙ. Шуны ла иҫтә тотоғоҙ: әгәр кеше психик сирле булған хәлдә лә, был суд тарафынан раҫланмаған икән, уның васыят яҙырға хоҡуғы бар тип ҡарала.

## БАЛАҒА ВАСЫЯТ

**"Өләсәһе, васыят яҙып, бөтә булған милкен бәләкәй генә ейәненә ҡалдырып китте. Әле паспорты ла булмаған сабый нисек итеп был мираҫты ҡабул итергә тейеш һуң? Өҫтәүенә, өләсәһенең фатиры менән дачаһы бөтөнләй алыҫта, икенсе ҡалала".**

- РФ Граждандыҡ кодексы ( 1-се бүлек, 1116-сы ст.) мираҫ ҡабул итеүсенең йәшен сикләмәй. Хатта ки мираҫ ҡалдырыусы иҫән сағында әле тыумаған хәлдә лә яралғы әсә ҡарынында булып, мираҫ асылғандан һуң донъяға килгән сабыйҙар ҙа вариҫ була ала. Мираҫты ҡабул итеү өсөн баланың вәкиленә мираҫ ителгән милек урыны буйынса нотариусҡа мөрәжәғәт итергә, йәғни, әлеге һеҙҙең осраҡта "бөтөнләй алыҫҡа, икенсе ҡалаға" барыбер юлланырға тура киләсәк. Баланың вәкиле - уның атаһы йә әсәһе, опекун йә попечитель. Мираҫты ҡабул иткәндән һуң был милекте һатыу зарурлығы килеп тыуһа, баланың вәкиле уның өсөн быны ла эшләй ала. Дөрөҫ, был осраҡта баланың теркәлгән урыны буйынса опека һәм попечителлек органдарының рәсми ризалығы талап ителәсәк. Шулай итеп, дәүләт балиғ булмаған баланың мәнфәғәттәрен яҡлай, юғиһә, бигүк намыҫлынан булмаған ата-әсә баланы мираҫ милкенән мәхрүм итеүе лә бик ихтимал. Милекте һатҡан хәлдә йә уның аҡсаһы бала исеменә һаҡлыҡ кассаһына һалына йә булмаһа унайлы (яҡын) урындан икенсе берәй күсемһеҙ милек һатып алына. Был мәсьәләләр опека органдарында хәл ителә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Йөрәк ауыртҡанда



Йәйге эҫелә ҡапыл ғына йөрәк ауыртыусан. Был ваҡытта ятмағыҙ, ултырырға тырышығыҙ. Тәрән итеп тын алығыҙ. Ике ҡулды ла сәтәкәй бармаҡтан терһәккә тиклем нығ итеп ышҡығыҙ. Сәтәкәй бармаҡҡа тырнағының ике яғынан массаж яһағыҙ.

## Аяҡтарҙа бәшмәк сире

❖ 1 сей йомортҡаны 1 ҡалаҡ үҫемлек майы, 1 ҡалаҡ һеркә эссенцияһы менән болғатығыҙ ҙа, тирене һәм тырнаҡтарҙы шуның менән эшкәртеп, полиэтилен пакет, уның өҫтөнән ойоҡ кейегеҙ. Был ҡатнашма ярылған үксәләр өсөн дә файҙалы.

❖ Аяҡҡа сыҡҡан сөйәлдәргә, баш бармаҡ янындағы сығып торған һөйәккә иртәнсәк ашарҙан алда һеләгәй һөртөгөҙ, был сара сир башланып ҡына торған ваҡытта файҙалы.

## Тоҙ менән дауаланыу

❖ Теш һурҙырғас, ҡанамаһын өсөн урынына тоҙ ҡапларға.

❖ Эпилепсия менән ауырыусыларға аҙнаға бер тапҡыр тоҙло һыуға мансылған эске күлдәк кейеп йоҡлау файҙалы.

❖ Ревматизм булғанда араҡыға тоҙ ҡушылған иретмәне ауыртҡан быуындарға һөртөп ышҡырға һәм йылы сепрәк менән бәйләп ҡуйырға. *Эс ҡатһа, ашҡаҙан насар эшләһә, эремсек йәки кәбеҫтә һыуына 2 балғалаҡ тоҙ ҡушып, иртәнсәк эсергә. Тәүҙә файҙаһы теймәһә, тағы ҡабатларға.

❖ Тән өҙләкһеҙ ҡысытһа, тоҙло ваннала йыуынырға.

❖ Баш ауыртһа, шулай уҡ бәрелгән урындарға аш һеркәһе менән тоҙҙан компресс эшләргә.

❖ Берәй нәмә ашап ағыуланғанда марганцовка булмаһа, 1 литр һыуға 1 балғалаҡ тоҙ ҡушылған иретмәне ҡулланырға була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАШҠОРТТАР - СИТТӘ

# БОРОНҒО БУЛА ТОРОП...

## Йәки ҡаҙаҡтарҙың башҡорттарға аптырағаны тураһында

**Рәсәйҙең төрки халыҡтары йәшәгән төбәктәрендә уларҙың дөйөм байрамы иҫәпләнгән һабантуйҙар үтеп тора. Был юлы был байрам Рәсәй сиктәренән сығып, Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өлкәһе баш ҡалаһында халыҡ-ара кимәлдә үткәрелде. Был күркәм сарала Рәсәйҙән һәм Ҡаҙағстандың төрлө өлкәләре-төбәктәренән биш йөҙҙән артыҡ ҡунаҡ ҡатнашты.**

Һабантуйҙар ҡайҙа ла һабантуй кеүек инде. Йөҙгә яҡын милләт вәкилдәре йәшәгән өлкәнең баш ҡалаһы Аҡтүбәлә лә ул юғары кимәлдә үтте. Ҡала уртаһындағы парк халыҡ менән шығырым тулы ине. Рәсми өлөштә Башҡортостандан да делегация килеүе тураһында хәбәр иттеләр, делегация етәксеһе - Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Рафаэль Зиннуров бейек трибунанан тороп, ҡатнашыусыларҙы сәләмләне, уртаҡ байрамдарҙың дуҫлаштыра, аралаштыра, хеҙмәттәшлеккә нигеҙ һала, яңы бәйләнештәр урынлаштыра торған әһәмиәте тураһында телмәр тотто. "Каруанһарай" ансамбле иһә һабантуйҙың үҙенсәлекле бер биҙәге булып, сығыштары сараға күркәмлек өҫтәне.

Тағы... Татарстан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Илдар Халиҡов етәкселегендәге 300-ләп кешенән торған Татарстан делегацияһының әүҙемлеге тураһында ла телгә алып үтке килә. Улар, ысынында, үҙҙәренең һабантуйына килгән һымаҡ әҙерләнгәйне. Премьер-министр шулайыраҡ тип әйтте лә: "Татар һабантуйында ҡатнашҡан бар халыҡты сәләмләйем..."- тине. Ҡаҙаҡ ерендә ҡаҙаҡ халҡының намыҫына тейермен, тип тә торманы. "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул" тигән әҙәп-ҡағиҙә лә, һабантуйҙың төрки халыҡтары донъяһында дөйөм байрам икәнлеге лә һанланманы. Хәйер, нисек кенә булмаһын, Татарстан делегацияһының әүҙемлеген, ҡәрҙәштәрҙең ситкә байрам итергә генә сыҡҡанда ла был эште дәүләт кимәлендәге мөһим эш итеп күтәрә һәм уны үҙ мәнфәғәттәрендә файҙалана белеүен маҡтарға кәрәк. Был юлы ла Ҡаҙағстан һабантуйы сиктәрендә Бөтөн донъя татар конгресы үҙенең күсмә ултырышын планлаштырған булып сыҡты. Шуға ла шундай ҙур делегация менән, шундай әҙерлек менән килгәндәр ҙә инде улар. Ә Премьер-министрҙары иһә Бөтөн донъя татар конгресының, төрлө төбәктәрҙәге татар милли үҙәктәре эшенең хөкүмәт кимәлендә хупланыуын, ярҙам алыуын тағы бер тапҡыр раҫланы. Ҡаҙағстандағы татар милли үҙәгенә машина тапшырҙы, милли үҙәктәрҙә әүҙем эшләүсе яҡташтары ла бүләкһеҙ ҡалманы.

Ошоларҙы бәйән иткәндән һуң "Ни өсөн ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙгә ярҙам итеү беҙҙә лә хөкүмәт кимәлендә ғәмәлгә атҡарылмай?" тигән һорау үҙенән-үҙе килеп тыуа.


“Каруанһарай”ҙар.

Әлбиттә, беҙҙә лә хөкүмәт кимәлендә ҡайһы бер документтар бар ул. "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" тигән дәүләт программаһы эшләп килә. Әле бына 2013-2018 йылдарға "Сит илдәрҙәге ватандаштар" дәүләт программаһы әҙерләнеп ята. Документта Рәсәй төбәктәрендә лә, Рәсәйҙән ситтә лә йәшәгән милләттәштәр ниндәйҙер кимәлдә иғтибар үҙәгенә алынырға, улар менән ниндәйҙер берлектәге мәҙәни-иҡтисади саралар үткәрелергә, уның өсөн күпмелер финанс сығымдары бүленергә тейешлеге ҡарала. Тик әлегә был документ ҡабул ителмәгән. Әлегә был документта ҡаралған барлыҡ сараларҙы Мәҙәниәт министрлығы өҙөп-йолҡоп атҡарырға тырыша. Һәр хәлдә, ситтә йәшәгән милләттәштәр үҙ йомоштарын юллап, ярҙамға өмөт итеп ошо министрлыҡҡа һәм, әлбиттә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына килә. Әммә беҙҙең ҡоролтайҙың Татарстан республикаһы ҡаҙнаһынан финансланған, "Татнефть"тән арыу ғына бағыусылыҡ ярҙамы алған, Ҡаҙанда тотош бер мәҙәниәт йортон биләгән, ҙур штаты булған Бөтөн донья татар конгресы кеүек финанс мөмкинлектәре юҡ, үҙе осон оска ялғап көн күрә. Шулай булғас, ҡәрҙәштәр менән ярышыу ҡайҙа ти инде ул! Шуға ла беҙҙең Ҡаҙағстандағы милләттәштәр татар ҡәрҙәштәргә һыйынып көн күрә, ҡала-өлкәләрҙә, хатта Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала айырым башҡорт ойошмаһы юҡ, бар ерҙә лә татар-башҡорт ойошмаларына берләшеп бөткәндәр. "Нинә айырым ойошма ойоштормайһығыҙ?" тигән һорауҙы йыш бирҙек Ҡаҙағстанда йәшәп ятҡан милләттәштәргә. "Башҡортостан ярҙам итмәй, беҙҙең төрлө саралар үткәрергә аҡса юҡ, шуға ла сараларҙы татарҙар менән бергә үткәрәбеҙ, уларҙың аҡсаһы бар..." - булды яуап. Был йәһәттән, әлбиттә, милләттәштәрҙең фекерен белешке килмәй. Бер ойошмаға ойошоу өсөн иң тәүҙә энтузиазм, теләк, үҙ милләтеңдең патриоты булыу етә. Ә бит Ҡаҙағстанда ошо тәңгәлдә бынамын тигән өлгө бар: ул берҙән-бер айырым башҡорт милли үҙәге - Аҡтау ҡалаһы башҡорттары ойошмаһы. **Уның етәксеһе Урал Аҙнабаев менән осрашып һөйләшеп, уларҙың эшмәкәрлеге тураһында бер-нисә кәлимә һүҙ әйтмәксе булдыҡ.**


Аҡтүбә ҡалаһында йәшәүсе башҡорт апайҙары.

- Эйе, беҙ Ҡаҙағстанда берҙән-бер башҡорт милли үҙәге, - тип һөйләне беҙгә Урал Әнүәр улы.- Беҙҙең үҙәк егерме ике йыл рәттән эшләп килә. Уға башланғыс һалыусыларҙың береһе һәм тәүге рәйесе - минең атайым. Мин үҙем, атайымдың эшен дауам итеп, икенсе йыл рәттән рәйес вазифаһын башҡарам. Быға тиклем өс йыл рәйес урынбаҫары булғайным. Әлбиттә, башҡорт милли үҙәктәрен һәр ҡалала, өлкәлә ойоштороп булыр ине. Бының өсөн башлап йөрөүсе лидер һәм теләк кенә кәрәк, тип уйлайым. Берәү ҙә һиңә әҙергә бөҙерҙе килтереп тоттормай, ойошторорға ла, йөрөргә, эҙләргә, ярҙам һорарға кәрәк. Ә йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә тора. Беҙ бына Башҡортостанға барған һайын унан китаптар, ниндәйҙер милли көнкүреш әйберҙәре алып ҡайтабыҙ: самауыр булһынмы ул, сәңгелдәкме, көйәнтәме. Күргәҙмәләргә сығарыр өсөн үҙенсәлекле музей экспонаттары туплайбыҙ шулай.

Беҙҙең Мангистау (Аҡтау) өлкәһендә һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса бөтәһе ике йөҙләп башҡорт йәшәй. Шуларҙың беҙҙең ойошма эшендә ҡатнашҡан иң әүҙемдәре - илле-алтмыш кеше. Ҡала, өлкә кимәлендә үткәрелгән сараларҙа гел ҡатнашып торабыҙ, халҡыбыҙҙың мәҙәни байлығын һәм йолаларын күрһәтергә тырышабыҙ.

Мангистау өлкәһендә егерме милли мәҙәни үҙәк эшләй. Ҡаҙаҡтар яғынан ярҙам ҙур, милли үҙәктәргә бина тәғәйенләп ҡуйылған, уны ҡуртымлау түләүһеҙ, саралар үткәргәндә төрлө ойоштороу мәсьәләләрендә, транспорт, аппаратура менән дә ярҙам итәләр. Аҡсалата ярҙам юҡ, әлбиттә. Саралар үткәргәндә беҙ бағыусыларҙы үҙебеҙ эҙләйбеҙ йә үҙебеҙҙең кеҫәнән тотонабыҙ. Былтыр, мәҫәлән, милли үҙәктәр араһында туған тел, мәҙәниәт буйынса бәйге уҙғайны. Уның төп шарттары - үҙ телеңдә йырлау, бейеү башҡарыу, милли кейемдәрҙе, йолаларҙы күрһәтеү. Беҙ, башҡорттар ҙа, тиңдәр араһында тиң икәнебеҙҙе лайыҡлы күрһәтеп, номинация һәм аҡсалата приз алып ҡайттыҡ.

Аҡтау өлкәһе кимәлендә төрлө саралар үткәреп тә үҙебеҙҙең барлыкты белдереп, тауышыбыҙҙы ишеттерәп торабыҙ. Былтыр Аҡтау ҡалаһында Башҡортостан көндәре үткәрҙек. Ошо күркәм сара айҡанлы беҙгә Салауат башҡорт драма театры килеп сығыш яһаны. Үҙәккә улар ике башҡорт милли костюмы бүләк итте. Шулай итеп, милли башҡорт атрибутикаһы коллекцияһы тулылана бара.

Үҙәгебеҙ мәҙәни сараларҙа ҡатнашыуҙан башҡа, спорт өлкәһендә лә төрлө саралар уҙғара. Былтыр көс экстримы турниры уҙғарҙыҡ. Махсус ҡунаҡ - яҡташыбыҙ, башҡорт халҡының ғорурлығы булған Эльбрус Ниғмәтуллинды саҡырҙыҡ. Ҡаҙағстанда бындай сара бер тапҡыр ҙа үткәрелгәне булмаған. Унда төрлө милләтле спортсы егеттәр сығыш яһаны. Турнир бөтәһенә лә оҡшаны, бик ҙур рәхмәттәр белдерҙеләр, гәзиткә яҙып сыҡтылар. Быйыл да, Алла бирһә, Мангистау өлкәһенең бодибилдинг һәм фитнес федерацияһы менән берлектә "Ҡаҙағстан кубогы" үткәрергә әҙерлек эштәре алып барабыҙ. Ҡунаҡҡа тағы ла Эльбрус Ниғмәтуллинды көтәбеҙ, ул беҙгә ойоштороу менән дә, кәңәштәре менән дә бик ныҡ ярҙам итә, төп судья ролен дә башҡара.

Шулай уҡ өс йыл рәттән өлкә кимәлендә милли көрәш буйынса турнирҙар уҙғара киләбеҙ. Мин үҙем элек көрәшсе инем. Грек-рим стилендә көрәшә торғайным. Шуға ла Ҡаҙағстанда ошо спорт төрөн таратырға теләк ҙур бар. Киләсәктә Ҡаҙағстан һәм Башҡортостан спортсылары араһында көрәш буйынса дуҫлыҡ уйындары үткәрергә хыялланам.

Быйыл Башҡортостан көндәрен ҙурыраҡ масштабта уҙғарырға теләк бар. Концерт программаһы, спорт саралары менән генә түгел, ә Башҡортостан сәнәғәте күргәҙмәһе ойоштороп, етештереүселәрҙең үҙҙәрен дә ҡатнаштырып үткәреү ине ниәтем. Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан араһында хеҙмәттәшлек мөнәсәбәттәрен нығытыуҙа, партнерҙар табыуҙа, заказдар йыйыуҙа был бик ҙур роль уйнар ине. Беҙҙең Мангистау өлкәһендә, мәҫәлән, алтмыш туғыҙ нефть ятҡылығы бар. Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан эшҡыуарҙары бергә эшләһә, ике яҡҡа ла ҙур файҙа булыр ине.

Милли үҙенсәлегеңде, телеңде, мәҙәниәтеңде һаҡлап ҡалыу Рәсәйҙән ситтә йәшәгәндәргә күпкә ауырыраҡҡа тура килә, тип уйлайым. Егерме ике йыл буйына ошо Аҡтау ҡалаһында милләтебеҙ тип йәшәгән, әүҙем булған апай-ағайҙарға шул тиклем һоҡланам. Уларға энтузиазмы һәм башҡарылған эштәре өсөн орден, премия бирер инем ҡулымдан килһә. Уларҙың, шулай уҡ минең атайымдың, әсәйемдең тырышлығы менән ойошторолған да инде беҙҙең башҡорт милли үҙәге. Минең атайым Салауат районы Урмантау ауылынан, әсәйем Стәрлебаш районы Шәкәр ауылынан. Улар 80-се йылдарҙа Ҡаҙағстанға күсеп киләләр. Аҡтауҙың саҡ төҙәлөп, үҫешеп ятҡан бына са-

ғы була. Әсәйем ике тапҡыр Ҡаҙағстандың халыҡ депутаты булды, Муналим районының мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләне. Атайым - рәссам-архитектор. Өлкәнең архитектура бүлегендә эшләне. 1991 йылда беҙ ғаиләбеҙ менән кире Башҡортостанға күсеп ҡайттыҡ. Мин "Салауатнефтеоргсинтез"да эшләнем. Биш йыл элек ҡатыным һәм ҡыҙым менән Ҡаҙағстанға ял итергә килдек тә, ҡаҙаҡ дуҫтарым менән яңы эш башларға һөйләшеп килешеп, тағы күсеп килдек.

Быйыл мин "Башҡортостан-Ҡаҙағстан сауҙа йорто" фирмаһы асып ебәрҙем. Ҡаҙаҡтарға Башҡортостанда етештерелгән тауарҙарҙы, аҙыҡ-түлекте күрһәтергә теләгем ҙур. Эшемде башлап ҡына торам әле, хеҙмәттәшлек иткән компаниялар һаны ла аҙ. Әлеге ваҡытта Ишембай "Витязь" машиналар төҙөү заводы, Кумертауҙың бер нисә предприятиеһы менән эш башланыҡ, уларҙың продукцияһына заказдар йыябыҙ. БР Президенты Рөстәм Хәмитов әйткәнсә, башҡорт брендын популярлаштырырға кәрәк. Республикабыҙ бит ныҡ бай, унда нимә генә етештерелмәй!

Әлбиттә, минең был эштәрем әле коммерция башланғысында ғына. Ҡаҙағстанда РФ Сауҙа вәкиллеге эргәһендә Башҡортостан вәкиллеге бар ул, тик мин уларҙың беҙҙең милли үҙәктәргә ярҙамын тоймайым. Шуға Башҡортостан Хөкүмәтенең Ҡаҙағстанда йәшәүсе милләттәштәр хәленә, беҙҙең кеүек энтузиастар эшенә лә иғтибар йүнәлтеүен, ярҙам итеүен бик теләр инек. Ҡаҙағстандағы башҡорттарҙың ныҡлап ассимиляцияға бирелә барыуын, башҡортлоҡтарын онотоуын күреп йөрәк әрней юҡһа. Бының өсөн берәүҙе лә ғәйепләргә теләмәйем. Барыһына беҙҙең битарафлыҡ ғәйепле. Әйткәндәй, беҙҙең пассивлыҡ ҡаҙаҡтарҙы ла аптырата ул. Улар йыш ҡына:"Ни өсөн шундай боронғо халыҡ була тороп, үҙегеҙҙе башҡаларҙан түбән ҡуяһығыҙ, башҡаларға ҡушымта булып йөрөйһөгөҙ? Ниңә ойошмаларығыҙҙы айырым төҙөмәйһегеҙ?"- тип әйтеп-әйтеп китәләр. Ярҙам итергә лә әҙер торалар, ғөмүмән, ҡаҙаҡтар бик ярҙамсыл, кеше хәленә инә белә торған, һине һүҙһеҙ аңлай торған халыҡ. Шуға ла уларҙың ярҙамына ла таянып, Ҡаҙағстандың бар ҡала-өлкәләрендә лә башҡорт милли үҙәктәре ойоштороу хыялы менән янам. Чимкент ҡалаһында ғына 600-ләп башҡорт йәшәй, ә үҙ аллы милли үҙәк юҡ. Астана, Нурлат, Алматыла ла башҡорттар күп. Бер ойошоп алыу ғына кәрәк. Артабан эш үҙе китә ул, был эшкә башҡалар ҙа яйлап ылыға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, ситтә йәшәгән милләттәштәрҙе әүҙемләштереү өсөн уларҙа илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғоһон уятырға кәрәк. Был тойғолар тыуыштан бирелмәҫкә лә мөмкин, улар тәрбиәләнә. Урал Аҙнабаев та бит:"Башҡортостанда йәшәгәндә үҙемдә патриотлыҡ тигәнде тоймай торғайным. Ситкә киткәс кенә һиҙҙем был тойғоноң көсөн. Тарихыбыҙҙы уҡый-уҡый, үҙ халҡыма башкөллө ғашиҡ булдым. Башҡорт булыуым менән сикһеҙ ғорурланам хәҙер..."- ти. Бына ҡайҙа һәм нисек башлана патриотлыҡ! Ә мин Ҡаҙағстанда булғанда башҡа милләттәштәрҙә быны тойманым. Ҡыҙғаныс.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# АСҠЫНДАРҘЫҢ...

## тарих ебен тағатҡаны...

**Ошо көндәрҙә Асҡын ауылының мәҙәниәт йортонда 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан зауряд-сотник, йәғни һуғыш ваҡыты тәртиптәре буйынса йөҙ башы итеп тәғәйенләнгән Зәғәфүрән Ибраһимовтан таралған нәҫелдәштәр йыйыны - шәжәрә байрамы үткәрелде. Фәнни-ғәмәли конференция форматындағы был сараға Башҡортостандың төрлө ҡала һәм райондарынан, шулай уҡ Пермь, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән ҡатнашыусылар саҡырылыуы ойоштороусыларҙың был эшкә үтә яуаплы ҡарап тотоноуы тураһында һөйләй. Ватан һуғышы башланыуға 200 йыл тулыуға арналған был шәжәрә байрамында ҡатнашҡан һәр кем үҙенең ырыуы, тарихы, милләте мәсьәләләренә ҡағылышлы һорауҙарына яуап таба алды, ә бәғзе берәү ете ятып бер төшөнә инмәгән мәғлүмәттәр ишетте. Һәр хәлдә, "Бына бит нисек...", "Шулааай икән..." тигән һоҡланыу ҡатыш аптыраулы ауаздар ишетелеп-ишетелеп ҡалды.**




### “Башҡортораҡбыҙ”

Сара башланыр алдынан эргәбеҙгә бер ҡатын килде лә, үҙен борсоған һорауҙары менән уртаҡлашырға теләге барлығы тураһында әйтте. Урмияҙ ауылынан Зөһрә Ғәйнуллина тип таныштырҙы үҙен: "Күп эҙләгәнем бар, әммә бөгөнгө көнгә тиклем ырыуыбыҙ - балыҡсылар тураһында төплө итеп өйрәнелгән бер генә фәнни хеҙмәткә лә юлыҡҡаным булманы. Бөтөн ырыуҙар ҙа яҡшы өйрәнелгән, ә беҙҙең ырыуға ниңәлер иғтибар етешмәй төҫлө, бәлки, киләсәктә ғалимдар был хатаны төҙәтер? Ғәли Соҡорой төҙөгән шәжәрә буйынса беҙҙең ырыу Майҡы бейҙән башланған булырға тейеш. Әнүәр Зәкир улы Әсфәндийәровтың "Башҡорт ауылдары тарихы" китабында беҙҙең тамырҙар мариҙарҙан тигән яҙыу бар, әммә был хата, минеңсә. Урмияҙ ауылына нигеҙ һалыусы кешенең башҡорт булыуы тураһында уның олатаһының Миндияр исемле булыуы һөйләй. Мариҙар был ауылға бик һуң ғына килеп урынлашҡан. Баймаҡ яҡтарындағы башҡорттар ғына - ысын башҡорт, тигән фекер йәшәй. Эйе, баймаҡтар рухлы, һәр ауылынан 20-ләп халыҡ йыры сыҡҡан. Ләкин беҙҙең яҡтарҙа ла аҙ сыҡмаған йырҙар. Бәлки, беҙ баймаҡтарҙан да башҡортораҡтыр әле..."

Зөһрә апай хаҡлы, әлбиттә. Һәм уның шулай тамырҙарын асыҡларға тырышып йөрөүе һоҡландыра ғына. Ысынлап та, халыҡ иҫәбен алыуҙың һуңғы мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Асҡын районында йәшәүселәрҙең 70 проценты, йәғни дөйөм халыҡтың яртыһынан күберәген башҡорттар тәшкил итә. Улар, эйе, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарынан төньяҡ-көнбайыш диалектта һөйләшеүҙәре менән бер аҙ айырыла. Шулай ҙа һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә был яҡ райондары мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу үҙ һөҙөмтәләрен бирә башланы. Урындағы халыҡтың, бигерәк тә балалар һәм йәштәрҙең, һуңғы йылдарҙа башҡорт әҙәби телен дә яҡшы үҙләштереүе ҡыуандыра. Асҡын балаларының "Ирәндек моңдары", "Оҙон көй" тигән конкурстарҙа башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарып, гран-при яулауҙары ла йыш булып тора. Тамыр тарта ни тиһәң дә.

### Шәжәрә - байрам ғына түгел...

Бәләбәй ҡалаһында йәшәүсе хаҡлы ялдағы нефтсе, инженер-механик Низаметдиновтың сығышы бик үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы булды. Балыҡсы ырыуы тарихына айырым туҡталып, ул был ырыуҙың тарихынан башлап бөгөнгөһөнә тиклем арауыҡҡа ҡыҫҡаса байҡау яһаны. Ул үҙенең һығымталарын Башҡортостан дәүләт архивы документтары, Бөрө өйәҙенең халыҡ иҫәбен алыу материалдары, хатта Лев Гумилев хеҙмәттәре менән дә дәлилләне. Бөтә ошо материалдар ярҙамында ул балыҡсы ырыуы халҡы йәшәгән ауылдарҙың шәжәрәһен төҙөгән.

- Яҡташыбыҙ Ғәли Соҡорой яҙып ҡалдырған, һуңынан уның улы Ғарифулла Кейеков тулыландырған Ирәкте шәжәрәһенә иғтибар итәйек: Майҡы бей - Алчак бей - Булғаир бей - Ҡаратабын бей (Ҡарача йәки Ҡарағәзиз). Ҡаратабын бейҙең дүрт улы булған: Балыҡсы бей, Рәсүл бей, Таймаҫ бей, Әхмәтшәйех бей. Әхмәтшәйех бейҙең атамаһы Ирәкте, шуның өсөн унан таралған тоҡомдо ирәкте башҡорттары тип йөрөтәләр, ә Балыҡсы бейҙән таралған тоҡомдо "балыҡсылар" тип атайҙар, күрәһең, - тип һөйләп китте Шәүкәт Тәхәүетдин улы. Ғарифулла Кейеков яҙып ҡалдырған Мемсек бей шәжәрәһен тикшергәндә, ундағы күп кенә исемдәр балыҡсыларҙа ла ҡабатлана. Төйгилде - Төй йылғаһын хәтерләтә, Тимер улы Күскилде (1720 - 1725) - Иҫке Күскилде ауылын, ә Байҡы - Байҡы ауылын нигеҙләгәндер, бәлки. Шәжәрәлә Мәмәт улдары Байсура, Байегет, Балтас күрһәтелгән. Байсура һәм Байегет Әмир ауылында аймаҡ башында тора. М. Нәҙерғолов Ғарифулла Кейековтың "Башҡорт тарихы вә ирәкте нәсәбе" тигән хеҙмәтен тәржемә иткәйне. Шунда, Байҡыбаш олоҫонда Байсура тигән хан булған, уның ҡәлғәһе булған, тип яҙып сыҡҡайны. Һүҙ Муллаҡай ауылы эргәһендәге Төй йылғаһының һул ярында урынлашҡан "Ыйыҡташ" тураһында бара...

Сараны ойоштороусы Асҡындағы тирә-яҡты өйрәнеү музейы директоры Әнзирә Ноғоманова был саранан ҡәнәғәт ҡалыуын йәшермәне:

- Айҙар буйы тынғыһыҙ эҙләнеүҙәребеҙ бушҡа китмәне, - тине ул.- Маҡсатыбыҙ - 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан зауряд-сотник Ибраһим, беҙҙең етенсе быуын олатайыбыҙ нәҫелен йыйып, туған-тыумасаларҙы, ҡан-ҡәрҙәштәрҙе таныштырып, осраштырып, барлыҡҡа килгән ҡайһы бер уртаҡ мәсьәләләр тураһында һөйләшеү ине. Ауылдаштар, ырыуҙаштарҙың был эште хуплап ҡабул итеүе өсөн ҡыуанам. Телефон аша күптәргә мөрәжәғәт итергә, бер тапҡыр ҙа күреп-белмәгән кешеләр менән аралашырға тура килде, һәр кем хәленән килгәнсә ярҙам ҡулы һуҙҙы...

### Кем һуң ул Зәғәфүрән?

Әнзирә Ғәниеваның өс ҡыҙы ла был шәжәрә байрамында ихлас ҡатнашты, Гөлминаз исемлеһе хатта Өфөлә үткән Шәжәрә конкурсында өсөнсө урын яулаған. Уның "Ата-бабалар аманатын һаҡлау" тип аталған тикшеренеү эшенән (етәксеһе Винария Кашапова) күренеүенсә, был нәҫел тураһындағы тәүге тарихи документтар XVII быуат аҙаҡтарына ҡарай. Атап әйткәндә, Гөлминаздың 11-се быуын ҡартатаһы Һарай Кинйәшевтың 1680 йылда тыуғанлығы, уның Һөйәнтүҙ трагедияһының (1736 йыл) шаһиты булғанлығы билдәле. Һөйәнтүҙ ваҡиғалары был кешенең яҙмышында ниндәй роль уйнаған, ул был фажиғә ваҡытында һәләк булғанмы, әллә үҙ үлеме менән үлгәнме - был турала мәғлүмәттәр һаҡланмаған. "Әммә шуныһы билдәле, - ти Гөлминаз, - был урындарға урыҫтар килеп йәшәй башлаясағын күҙаллап, ул (Һары Кинйәшев) үҙен үлгәндән һуң Һарыс йылғаһы буйына ерләүҙәрен васыят итеп ҡалдырған. Үҙе үлгәс, васыятын үтәгәндәр - ҡәбере Солтанбәк ауылына ингән ерҙә урынлашҡан, урындағы халыҡ был урынды Һары тип йөрөтә". Шәжәрәне артабан Һарының улы Ибраһим (1720 йылда тыуған), Ибраһимдың улы Ғәбделғәзиз (1840 йылда тыуған) дауам итә. Зауряд-сотник булып хеҙмәт иткән Зәғәфүрән Ибраһимов атлы кеше тураһында байтаҡ ҡына тарихи материалдар килтерелә. Ғәбделғәзиздең улы Зәғәфүрәндың Ватан һуғышы барған ваҡытта Вильно ҡалаһы тирәһендә һуғышҡан рус ғәскәрҙәренә башҡорттар тарафынан йыйылған аттарҙы килтереүҙә ҡатнашыуы билдәле. Был мәғлүмәттәр Әнүәр Зәкир улы Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана" китабынан алынған. Уҡыусы ҡыҙ шулай уҡ халыҡ иҫәбен алыу документтарына ла таянып эш иткән. Улар ярҙамында Зәғәфүрәндең уландарын, ейәндәрен, бүләләрен һәм артабанғы вариҫтарының исем-аты, тыуған йылы, эше, ғаиләһе тураһында асыҡлаған. Зауряд-сотник Зәғәфүрән Ибраһимовтың вариҫтары (Тәкиуллиндар, Һарайшиндар, Хафизовтар, Низаметдиновтар, Насертдиновтар, Әғләмовтар, Аҫраровтар Ноғомановтар һәм башҡалар) бөгөнгө көндә Сураш, Ҡамашаҙы, Солтанбәк, Яңы Күскилде, Иҫке Күскилде, Урмияҙ ауылдарында һәм сит яҡтарҙа төпләнгән.

Тикшеренеү эшендә Хөснийәр исемле шағир ҡартаталары тураһында ла бик тәфсирләп яҙылған. Ғайса Хөсәйеновтың хеҙмәттәренә таянып, Хөснийәрҙең суфый-шағир булыуы асыҡланған, уның ҡаҙаҡтарҙа булғанда атта сабып, ҡыҙ баҫтырыу тураһындағы бер шиғыры ла килтерелгән.

Үҙенең һығымтаһында Гөлминаз Ғәлина: " Беҙҙең арала ырыу һәм ғаилә тарихын белеүселәр бар саҡта уларҙың бер һүҙен дә түкмәй-сәсмәй яҙып алып ҡалайыҡ", - тип мөрәжәғәт итә.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Был сараны ойоштороусыларға ла, уны уйлап сығарыусыларға рәхмәт әйтке килә. Сөнки уның тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Төньяҡ-көнбайыш диалектта һөйләшкән милләттәштәрҙең кем икәнлеген танытыуҙа ла, бигерәк тә Гөлминаз кеүек уҡыусы балаларҙа халҡыбыҙ тарихына ҡыҙыҡһыныу, ихтирам уятыуҙа ла ҙур уның әһәмиәте.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

***✓ Беҙҙә әлегә тиклем үҙһенмәгән ҡайһы берәүҙәр төркиҙәрҙең ниндәй көскә, байлыҡҡа эйә икәнен дә белә, ләкин быны танырға теләмәйҙәр, һәм быны бөтәндәрҙең дә белеүен теләмәйҙәр.***



**Әзербайжан Фәндәр академияһының Археология һәм этнография институты хеҙмәткәре, дәүләт телевидениеһының халыҡ ижады редакцияһы баш мөхәррире, тарих фәндәре докторы Гөллү Йолоғлуны төрки донъяһында төрки тел белгесе, этнофотограф, тәржемәсе, этнограф, фольклорсы булараҡ та яҡшы беләләр. Сөнки Гөллү ханым төркиҙәр йәшәгән бар төбәктәрҙә тиерлек булып өлгөргән, сәйәхәттәре, осрашыуҙары тураһында радио һәм телевидение аша даими сығыштар яһай. Дөйөм төрки тарихы менән шөғөлләнеүселәр әлегә бик күп түгел, һәр хәлдә, беҙ бик аҙҙарының ғына исемдәрен беләбеҙ. Тап ошо йүнәлештә эшләүсе ғалимә булараҡ, беҙ Гөллү ханым Йолоғлуға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек. Был һөйләшеү тарих тигән һүҙгә тәрәнерәк ҡарарға, үҙебеҙҙең донъя цивилизацияһында тотҡан урыныбыҙҙы нығыраҡ аңларға ярҙам итер, тигән өмөттәбеҙ.**

# ТӨРКИҘӘР ТӘРӘН ТАМЫРЛЫ,

## улар донъяға дәүләтселек тәжрибәһе биргән

**▸ Тарихтан бөгөнгә көн өсөн бик күп фәһем алырға була. Был йәһәттән төрки донъяһы ла иғтибар үҙәгенән ситтә ҡала алмай. Гөллү ханым, һеҙҙең ҡарашығыҙса, төрки халыҡтары тарихына ҡағылышлы нимә тураһында күберәк һүҙ алып барырға тейешбеҙ. Ғөмүмән, төркиҙәр донъя цивилизацияһына нимә биргән?**

- Беренсенән, алдыбыҙҙа дөйөм тарихыбыҙҙы бик яҡшы итеп өйрәнеү бурысы тора. Был үтә лә мөһим. "Тарих" тигән һүҙ үҙ эсенә нимәне ала һуң? Мәҙәниәт тарихын, дин тарихын, ауыҙтел ижады тарихын, яҙма әҙәбиәт тарихын, музыка ҡоралдары ла индерелгән йырмоң ижады тарихын, артабан, көнкүреш тарихын, яҙмабыҙ тарихын, ҡалалар төҙөү тарихын, көнкүрешхужалыҡ итеү тарихын һәм башҡалар, һәм башҡалар. Дөйөм тарихты өйрәнеү беҙгә нимә бирәсәк, тигән һорауға яуап эҙләү урынлы булыр, моғайын. Тарихыбыҙҙың ни ҡәҙәр боронғо һәм тәрән тамырлы, рухиәтебеҙҙең ни ҡәҙәр бай икәнен нығыраҡ белер, аңлар, инаныр өсөн. Ни өсөн бөгөн тарҡаулыҡта йәшәйбеҙ, айырымлыҡтарыбыҙ нисек барлыҡҡа килгән? Яҙмабыҙҙың нисек барлыҡҡа килеүен, кешелеккә нимәләр биреүебеҙҙе, донъя картаһында боронғо төрки дәүләттәре ниндәй роль уйнағанын, бөгөнгө Европа дәүләттәре төркиҙәрҙең ниндәй хәрби тактикаларын ҡулланыуын, донъя музейҙарын төркиҙәрҙең ниндәй матдимәҙәни хазиналары биҙәүен, ниндәй тормош-көнкүреш әйберҙәре һәм ҡоралдары үҙҙәренең сығыштары менән төркиҙәргә "бурыслы" икәнен белеү тарихта ғына түгел, бөгөнгө заманда тотҡан урыныбыҙҙы аңларға ярҙам итәсәк. Шуны һыҙыҡ аҫтына алыу кәрәк: иң мөһиме, беҙ - донъяға дәүләтселек тәжрибәһе биреүселәр. Иң ҙур дәүләттәрҙе ойоштороусылар төркиҙәр бит. Уларҙы өйрәнеү генә түгел, ә һөйләргә, аңлатырға, рекламаларға тейешбеҙ. Эйе-эйе, рекламаларға! Сөнки беҙҙә әлегә тиклем үҙһенмәгән ҡайһы берәүҙәр төркиҙәрҙең ниндәй көскә, байлыҡҡа эйә икәнен дә белә, ләкин быны танырға теләмәйҙәр, һәм быны бөтәндәрҙең дә белеүен теләмәйҙәр.

**▸ Әзербайжанда боронғо төркиҙәрҙең тарихын өйрәнеү мәсьәләһе нисек тора? Ғалимдарығыҙ бөтән төрки ғалимдары менән хеҙмәттәшлек итәме? Әгәр ҙә итә икән, күберәк ҡайһы өлкә тураһында һүҙ йөрөтә алабыҙ. Археологиямы, архитектурамы, яҙмамы, фольклормы? Һәм бөгөн нимә менән ғорурлана алаһығыҙ?**



*Совет осоронда, хәйер, унан алдараҡ Рәсәй батшалығында ла, үҙеңдең төрки сығышлы икәнеңде әйтеү шаҡтай хәүефле ине. "Пантюркист" тигән һүҙ ҡурҡыныс тамға булып торҙо. XX быуаттың 50-се йылдарына тиклем боронғо төрки эпосы "Дәдә Ҡорҡот"ҡа дошмандарса мөнәсәбәт булды. Төрки тел белгестәре иһә тик телдәр менән генә шөғөлләнде. Ә бит уларға дөйөм төрки мәҙәниәте, дөйөм төрки тарихы, этник мәсьәләләр менән дә шөғөлләнергә кәрәк ине. Был һорауҙар менән төрки милләттәренә ҡарамаған ғалимдар ғына шөғөлләнде. XX быуаттың 70-се йылдарындағы тарих дәреслектәренә күҙ һалығыҙ әле. Төркиҙәр унда нисек һүрәтләнә? Башҡорттар - бунт күтәреүселәр, татарҙар - баҫҡынсылар, әзербайжандар - варварҙар, османлылар - дошмандар... Имеш, бөтөн төрки халҡы күсмә тормошта йәшәгән дә, һарыҡсылыҡ менән генә шөғөлләнгән, улар бер нәмә лә төҙөмәгән, ижад итмәгән, бары тик баҫып алған, емергән, талаған, үлтергән.*

- Совет осоронда, хәйер, унан алдараҡ Рәсәй батшалығында ла, үҙеңдең төрки сығышлы икәнеңде әйтеү шаҡтай хәүефле ине. "Пантюркист" тигән һүҙ ҡурҡыныс тамға булып торҙо. XX быуаттың 50-се йылдарына тиклем боронғо төрки эпосы "Дәдә Ҡорҡот"ҡа дошмандарса мөнәсәбәт булды. Төрки тел белгестәре иһә тик телдәр менән генә шөғөлләнде. Ә бит уларға дөйөм төрки мәҙәниәте, дөйөм төрки тарихы, этник мәсьәләләр менән дә шөғөлләнергә кәрәк ине. Был һорауҙар менән төрки милләттәренә ҡарамаған ғалимдар ғына шөғөлләнде. XX быуаттың 70-се йылдарындағы тарих дәреслектәренә күҙ һалығыҙ әле. Төркиҙәр унда нисек һүрәтләнә? Башҡорттар - бунт күтәреүселәр, татарҙар - баҫҡынсылар, әзербайжандар - варварҙар, османлылар - дошмандар... Имеш, бөтөн төрки халҡы күсмә тормошта йәшәгән дә, һарыҡсылыҡ менән генә шөғөлләнгән, улар бер нәмә лә төҙөмәгән, ижад итмәгән, бары тик баҫып алған, емергән, талаған, үлтергән. Шулай булғас, беҙ нимә менән ғорурлана ала инек? Мәктәптә бөтән милләт вәкилдәре менән йәнәш ултырған беҙҙең балаларыбыҙ үҙҙәренең ата-бабалары өсөн ояла торғайны. Ана шунан башланды ла инде икенсе дингә күсеү, паспортта милләтте үҙгәртеү - этнос булараҡ күпселек бәләләребеҙҙең дә башы шунда ята.

Ләкин хәҙер инде бөтәһе лә әкренләп үҙгәрә бара. Бөгөнгө Әзербайжанда беҙ - тарихсылар, этнографтар - тамырҙарыбыҙҙы иркенләп өйрәнәбеҙ, хеҙмәттәребеҙҙе баҫтырабыҙ, төрлө саралар уҙғарып торабыҙ. Дөйөм милли лидерыбыҙ Хәйҙәр Алиев "Дәдә Ҡорҡот китабы"н - беҙҙең төп китабыбыҙ, тип белдерҙе, Дәдә Ҡорҡотто - "беҙҙең атабыҙ" һәм "уртаҡ бабабыҙ", тип атаны. 1997 йылдың 20 апрелендә Президент "Дәдә Ҡорҡот китабы" эпосының 1300 йыллығын уҙғарыу тураһындағы сараға ҡул ҡуйғайны, ә инде 2000 йылда ул бөтөн төрки республикаларының етәкселәрен Бакуға йыйҙы. Был мәртәбәле сарала беҙ, Ҡатындар мәсьәләһе комитеты менән берлектә, халыҡ-ара-конференция үткәрҙек. Хәйер, унда һеҙ үҙегеҙ ҙә ҡатнаштығыҙ. Уҡыусыларға иһә шуны ғына өҫтәп әйткем килә: Фәрзәнә Аҡбулатованың әҫәрҙәрен Әзербайжанда ла яҡшы беләләр.

**▸ Гөллү ханым, һеҙгә күп кенә төрки республикаларында булыу бәхете тейгән, сәфәрҙәрегеҙ тураһында матбуғатта яҙаһығыҙ, радио аша сығыш яһайһығыҙ. Ниндәй ул бөгөнгө ысынбарлыҡ, төркиҙәр ни ҡәҙәр бер-береһенә яҡын тора? Әллә уларҙы фәҡәт тарихи хәтер генә бәйләйме?**

- Төркиҙәрҙең берҙәмлеге тураһында һүҙ йөрөтә алмайбыҙ. Ул бик күп дәүерҙәр элек булған хәл. Мин, ғөмүмән, уларҙың бер телдә, бер диндә булыуы һәм бер үк исемдәр менән аталып йөрөтөләүе яғында түгелмен. Төрки донъяһының байлығы ла шунда: улар тел, мәҙәниәт төрлөлөгө менән айырыла, төрлө дин тоталар, антропологик яҡтан да улар төрлө. Был айырымлыҡтар тарихтағы ниндәйҙер өҙөклөк тураһында һөйләй. Инаныуға килгәндә... Берәүҙәре мосолман, икенселәре насрани, өсөнсөләре йәһүди, дүртенселәре ламаист... Шуға ҡарамаҫтан, барыбер уларҙың бөтәһендә лә шаманизм эҙе һаҡланған.

Әлбиттә, иҡтисади бәйләнештәрҙе үҫтерергә кәрәк. Ләкин бындай бәйләнеш оҙайлы киләсәк түгел. Сөнки аҡса, бизнес булған ерҙә фәҡәт иҡтисади мәнфәғәт кенә күҙәтелә. Бәхәстәр, һорауҙар килеп сығып ҡына торасаҡ. Диндә берләшеүме? Ул да мәсьәләне хәл итмәҫ ине. Хатта Исламдың үҙендә генә лә нисәмә ағым бар.

Бер-беребеҙгә нисек яҡыная алабыҙ? Нимә беҙҙе яҡынайта ала? Мәҙәниәт! Сағыштырыу йүнәлешендәге тарихи, этнографик, фольклор тикшеренеүҙәре. Күберәк дөйөм мәҙәни саралар уҙғарыу кәрәк беҙгә.

**▸ Һеҙ Башҡортостанда ла булдығыҙ. Ерле халыҡ ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы? Башҡорттар бөтән халыҡтарға нимә тәҡдим итә ала, тип уйлайһығыҙ, ғөмүмән, халҡыбыҙ төрки донъяһына нимәһе менән ҡыҙыҡлы?**

- Башҡортостан! Ни өсөн ҡурайҙы йәки "Сибай" йырын тыңлаған саҡта бөтөн донъямды онотоуымды аңлата алмайым. Башҡорттар яугир халыҡ, улар ысын төркиҙәр. "Урал батыр" - миненң иң ярат҇ҡан эпостарымдың береһе. Милли кейемегеҙ бик тә үҙенсәлекле. Баш кейеме, айырыуса ирҙәрҙең йәнлек тиреһенән тегелгән кәпәсе үтә ҡалды. Йыр-бейеү - бөтәһе лә сағыу, яҙғы яланды хәтерләтә һәм улар ысын мәғәнәһендә сихри ҙа.

XX быуаттың 90-сы йылдар аҙағында Өфөлә Төрки телле халыҡтарҙың конгресы уҙғарылғайны. Унда миңә лә ҡатнашыу бәхете тейҙе. Тирәйүндең йәшеллеге хайран итте. Матур итеп ямғырҙар яуып үтә. Һауа торошо һис кенә лә ялҡытмай. Тәндәрен мин ут яҡмайынса китап уҡый инем. Шундай яҡты төндәр! Күргәндәрҙе һанап бөтөрлөк түгел: университет, радио һәм, иң мөһиме, Ишембай районында үткән һабантуй, Көҙән ауылындағы Әхмәтзәки Вәлидиҙең йортмузейы... Һәм, әлбиттә, милли ризыҡтарығыҙға ҡарап ғәжәп иттем. Бешерелгән йылҡы ите, ыҫланған йылҡы ите, ҡурылған йылҡы ите,

✓ Ыҙғышып, талашып китә торғайнылар. Шул ваҡытта өйҙән сығып киткем килә торғайны. Атай менән әсәй бер-береһенә йылмайып ҡараһын өсөн әллә ниҙәр эшләргә әҙер инем.



йылҡы итенән колбаса. Бөтәһе лә йылҡыныҡы! Мин рәхәтләнеп уларҙың һәммәһен дә тәмләп ҡараным, бөтәһе лә оҡшаны. Күсәнәс итеп бирелгән башҡорт балы менән үҙемдең иң яҡындарымды һыйланым. Матур таштарығыҙҙы, йәшмәне хәтерләйем. Бына әле форсаттан файҙаланып, һеҙҙең халыҡҡа рәхмәтемде еткерә алыуыма ҡыуанып бөтә алмайым. Йәшмәнән яһалған шкатулканы ҡәҙерләп һаҡлайым мин. Унын эсендә икенсе төрки халыҡ вәкиле - ҡараимдарҙың ғалимәһе Галина Кобескайте бүләк иткән гәрәбәне һалып ҡуйғанмын. Һабантуйҙағы милли уйындарҙы, һыбайлылар, батырҙар ярыштарын иҫкә алам.

Беҙҙең, ысынлап та, уртаҡ нәмәләребеҙ бихисап. Был тәбиғи, сөнки беҙ - бер тамырҙан бит. Шулай уҡ айырымлыҡтарыбыҙ ҙа етерлек. Күҙ алдына килтерәйек, ти, бер ғаиләлә биш ир туған үҫә. Ҙурайғас, кәсеп итер өсөн, улар төрлөһө төрлө яҡҡа таралыша. Унда өйләнәләр, балалар үҫтерәләр. Төрлө тәбиғәт шарттары, төрлө күршеләр, уларҙың дине, был төбәктең йола-ғөрөф-ғәҙәте, тел-һөйләштәре, йәшәү-көнитмеше мотлаҡ туғандарға ла йоғонто яһаясаҡ. Йылдар үткәс, был ғаилә ҡабаттан осраша, айырымлыҡтар шундуҡ күренмәйәсәк, ләкин уларға нимәләр барыбер һеңеп ҡалған буласаҡ. Беҙҙе берләштерә торған уртаҡ нәмәләрҙе табырға кәрәк. Һәм ул уртаҡ нәмәләр - беҙҙең дөйөм төрки мәҙәниәте, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре.Тап ошо өлөшсәләр беҙгә бөгөнгө донъяла үҙебеҙҙең милли үҙенсәлегебеҙҙе, милли йөҙөбөҙҙө һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк.

**Гөллү ханым, үҙегеҙҙең дә эшмәкәрлегегеҙ, маҡсатығыҙ, бурыстарығыҙ тураһында һөйләһәгеҙ ине.**

- Жаналлы тигән ауылда уҡыған саҡта мин "Әзербайжан пионеры" тигән гәзит алдыра торғайным. Унда икенсе союздаш республикаларҙа йәшәүсе пионерҙарҙың адрестарын бирәләр ине. Мин Молдавия, Украина, Тажикстан, Үзбәкстан, Грузия һ.б. республикаларҙың уҡыусылары менән хат алыштым. Бер-беребеҙгә халҡыбыҙ тотҡан йола, ғөрөф-ғәҙәттәр тураһында яҙа торғайныҡ, бала саҡта бөтәһе лә ҡыҙыҡ бит, бер-беребеҙҙең телдәрен дә өйрәндек. Шул саҡта мин ҡайһы бер балалар менән уртаҡ тел табыуы бик еңел икәнен аңланым. Ни өсөн тигәндә, милли мәҙәниәттә, ауыҙ-тел ижады ҡоматҡыларында уртаҡлыҡтар күп булып сыҡты. Етмәһә, беҙҙең Казах районы Әрмәнстан һәм Грузия менән сиктәш. 70-се йылдарҙа атайым үҙенең "Победа"һында беҙҙе боронғо төркиҙәр йәшәгән Дилиджан һәм Иджеванға алып барғанда беҙҙе һәр саҡ поста әрмән милицияһы туҡтатып, "Һайес? Туркес?" тип һорай торғайны. Атайым "Туркес" тип әйтеү менән документтарҙы ентекле тикшереү башлана. Ни өсөн улай икәнен һорағас, атайым: "Әрмәндәр үҙҙәрен "һай", ә беҙҙе "төрөк" тип йөрөтә. Постовой беҙҙең "һай"мы, "төрөк"мө икәнлекте белергә теләһә, мин уға "төрөк" тип яуап бирәм", - тип аңлатҡайны. Бына шулай итеп бәләкәй саҡта мин үҙебеҙҙең төрки сығышлы икәнебеҙҙе белдем. Университетҡа уҡырға ингәндән һуң, төрки халыҡтары тарихын ныҡыраҡ өйрәнергә ҡарар иттем. 80-се йылдарҙан башлап, күп йылдар инде төркиҙәрҙең тарихын, фольклорын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнәм. Төрки халыҡтары йәшәгән бөтөн ерҙәрҙә лә булдым, тиерлек (Македония, Иран, Ираҡ, Сүриә, Төркиә, Төньяҡ Кипр, Ҡаҙағстан, Ҡараҡалпаҡстан, Хакасия, Тыва, Молдова һ.б. Тик Америка индеецтарын (сиу-дакота һ.б. ҡәбиләләрҙе), Ҡытай уйғырҙарын ғына күргәнем юҡ әлегә.

Бөгөнгө көндә мин тарих фәндәре докторы, филология фәндәре кандидаты. 1998 йылда милли лидерыбыҙ Хәйҙәр Алиев мине йәш әҙәбиәтселәрҙең махсус стипендияһы менән бүләкләне. Ошо уҡ йылда Төркиәнең ул саҡтағы Президенты Сөләймән Демирель ҡулынан да награда алдым. Анкарала Ататөрк мәҙәни үҙәгенең мөхбир-ағзаһы булып торам. Әзербайжан яҙыусылар союзы, Әзербайжан Журналистар союзы ағзаһымын. Әлеге көндә һигеҙ китап һәм дүрт йөҙҙән ашыу хеҙмәттең авторымын. Ҡайҙа ғына барһам да, нимә генә эшләһәм дә төп йүнәлешем, маҡсатым - төрки халыҡтарының тарихын һәм бөгөнгөһөн өйрәнеү. Киләсәк хаҡына беҙ фиҙакәр эшләргә һәм хеҙмәттәшлекте үҫтерергә тейешбеҙ, тип ҡарайым. Уны беҙ үҙебеҙ эшләмәһәк, кем эшләр һуң?

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

ҺАБАҠТАР

# ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕН...

## заман ғына үҙгәртә аламы?

**Нимә ул ғаилә ҡиммәттәре? Ошо һорау менән күптән түгел ике быуын кешеһенә мөрәжәғәт иткәйнем. Уның береһе 13 йәшлек уҡыусы ҡыҙ булһа, икенсеһе - 55-тән уҙған өс балалы әсәй, дүрт ейәнсәргә өләсәй. Яуаптары, билдәле инде, икеһенең ике төрлө. Ни тиһәң дә, уларҙың береһе ярты быуаттан ашыу ғүмер иткән, ярайһы ҙур ғына тәжрибә туплаған, ә икенсеһе - яңы тормош юлына баҫҡан үҫмер бит. Ҡайһыныһының яуабы яҡынырaҡ - хөкөм һеҙҙең ҡулда.**



**13 йәшлек бала яуабы:** Ғаилә ҡиммәттәренә, һис шикһеҙ, иң беренсе, мөхәббәт, тоғролоҡ, ғаилә ағзаларының бер-береһенә яҡшы, ихтирамлы мөнәсәбәте, балаларының ата-әсәһенә изгелекле мөғәмәләһе, үҙ-ара татыулыҡ, зарарлы ғәҙәттәрҙән азат булыу, сәләмәт тормош алып барыу инә. Миненсә, тап ошолар бер ниндәй аҡсаға, алтын-көмөшкә һатылмаған ҡиммәттәр. Уларҙы һатып та, урлап та, кешенән тартып алып та булмай, - ти йәш ҡыҙ. - Был фекеремде ҡасан булһа ла үҙгәртермен тип уйламайым, сөнки бала саҡтан уҡ ғаиләләге татыулыҡтың, атай-әсәйҙең беҙҙе генә йәғни балаларын ғына түгел, ә бер-береһен дә яратыуы мөһим икәнлеген белеп үҫтем.

Мин - дүрт балалы ғаиләлә баш баламын. Беҙҙең менән тағы өләсәй йәшәй. Өсөнсөгә һылыуым тыуғансы беҙҙең өйҙә тыныслыҡ булманы. Бәләкәй булһам да, шуға иғтибар итә инем: ниңәлер атайым да, әсәйем дә гел бер-береһенән етешһеҙлек кенә эҙләне. Бер-береһенә бер йылы һүҙ әйтмәнеләр, йылы ҡараш белдермәнеләр. Өләсәйҙән дә оялмай, ыҙғышып, талашып китә торғайнылар. Шул ваҡытта өйҙән сығып киткем килә торғайны. Атай менән әсәй бер-береһенә йылмайып ҡараһын өсөн әллә ниҙәр эшләргә әҙер инем. Уларҙың йылы ҡарашынан бөтә өй эсе яҡтырып, нурға сума, өләсәйгә лә рәхәт, ә мин һирәк була торған бындай мәлдәрҙә бәхеттең етенсе ҡатына атлығам!

Биш-алты йәштәрҙә үк яратыу тойғоһоноң ниндәй мөғжизәгә эйә булғанын аңлағанмын, күрәһең, сөнки йыш ҡына "Бер-береһен ратмағас, атайым менән әсәйем ниңә өйләнде икән?" тигән уй килә торғайны башҡа. Өйҙә эш бөткәс, күмәкләп ултырып кино, сериалдар ҡарай торғайныҡ. Ҡыҙ менән егеттең, ир менән ҡатындың бер-береһенә яратып ҡараған мәлдәрендә" Их, минекеләр ҙә бер-береһен шулай ратһындар ине", тип уйлай торғайным. Үҙем йәшереп кенә алмаш-тилмәш атайыма, әсәйемә ҡарайым. Ә улар тап шул мәлдә берәй мәшәҡәт-эш табып, йә тороп китәләр, йә кинәт кенә атайымдың йүткергеһе килә, ә әсәйемдең ашы таша.

Өсөнсө бала тыуғас ҡына бөтәһе лә мин теләгәнсә булды. Әсәйем эштән ҡайтҡан атайымды кескәй һеңлем йәки ҡустым исеменән булһа ла "Ҡайһылай һағындырып ҡайттың, атай", тигән булып матур итеп йылмайып ҡаршы алды. Ә атайым, әсәйегеҙҙе тыңлап йөрөгөҙ, ярҙам итегеҙ тип, әсәйемде һөйөндөрҙө. Хәҙер беҙҙең ғаиләлә бөтәһе лә ал да гөл. Ике ҡыҙ, ике ул үҫәбеҙ. Әсәй-атайым да, беҙ ҙә, өләсәй ҙә бәхетле, сөнки беҙҙең өйҙә мөхәббәт һәм татыулыҡ хакимлыҡ итә. Бына шуның өсөн дә бер-береңде яратып, хөрмәт итеп, татыулыҡта йәшәүҙе ғаиләләге иң мөһим ҡиммәттәр тип атайым...

**55 йәшлек апайҙың яуабы ошолайыраҡ булды:** Нужа ҡаласын күп ашамаһам да, байтаҡ тормош тәжрибәһе туплаған кеше булараҡ, шуны әйтә алам: торлағың, юғары эш хаҡы биргән эш урының, йәнә машинаң, йөнтәҫ ҡуллы таныштарың булмаһа, башҡа ғаилә ҡиммәттәренә һан юҡ бөгөн. "Һөйгәнең менән ҡыуыш та ожмах" тип йәшәгән романтика заманы артта ҡалды, тип уйлайым. Аҡсаң булмаһа, мөхәббәт менән генә туҡ булып булмай. Һүҙемде раҫлап, үҙемдең бер туған һылыуымдың яҙмышын ҡыҫҡаса һөйләп үтәм.

Мәктәп йылдарынан уҡ яратып йөрөгән егетен армияға оҙатып көтөп алды ул. Туйға аҡса эшләү һылтауы менән ситкә эшкә киткән егетен тағы алты йыл көттө. Эшләгән ҡалаһында өйләнеп, күптән балаһы тыуыуы тураһында ишеткәс тә көтөүҙән туҡтаманы һеңлем. Ҙурайып бөткән улы, ҡатыны менән ауылға ҡайтып төшкәс тә әле һөйөүе һүрелмәне. Ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ сибәр туғаныбыҙҙың зарығыуын күреп, бөтәбеҙ ҙә ҡайғырҙыҡ, бигерәк тә әсәйебеҙ ауыр кисерҙе. "Шашып һөйөү шайтандан ул, кешегә сабыр һөйөү кәрәк,"- тигән булыр ине атайым мәрхүм.

Утыҙынсы йәше менән барғанда һылыуыбыҙ күрше ауылға бик күркәм ғаиләгә килен булып төштө. Кейәү һеңлем өсөн йәнен фиҙа ҡылырға ла әҙер ине, балалары өсөн дә өҙөлөп торҙо.Һеңлем генә уны үҙ итә алманы. Һаман да егерме йәшендә туйға аҡса эшләйем тип ситкә киткән егетен көттө. Мөхәббәттең кеше ихтыярына бәйле булмаған тойғо икәнлеген һәр кем белә, әммә уның кешене аҡылдан яҙыр сиккә еткереүен беләһегеҙме? Кәләшенең үҙен яратмағанын белһә лә, кейәү балалары хаҡына түҙҙе, тойғоларын тышҡа сығармай, сабыр ғына йәшәүен дауам итте. Уларҙың икеһен дә ысын күңелдән йәлләй торғайным.

Улдарының береһенә - 14, икенсеһенә 12 йәш тулған йылда тәүге мөхәббәтенең айырылып ҡайтҡанын ишетеп, өйөнән бер ҡат кейемен дә алмай, шул иргә сыҡты ла китте һеңлем. Иң ҡыҙғанысы шунда: бер аҙна ла йәшәмәй, үҙенең ҙур хата эшләгәнен аңланы. Утыҙ йылға яҡын яратып көтөп алған кешеһе бик түбән кеше булып сыҡты. Әсәһенең ярым емерек йортондағы йыһаздарҙың иҫке булыуын күреп, һеңләмә өйөнән карауатын, башҡа кәрәк-яраҡтарын алып килергә ҡуша. Мөхәббәтенән башын юғалтҡан туғаным, балалары хаҡын да уйламай, нимә кәрәк, шуны һөйгәне өйөнә ташыны.

Бер ай ҙа йәшәмәне улар, "һөйгәнең менән ҡыуыш та ожмах" тигәнде ҡабул итә алманы һеңлем. Ашарға ашы ла, кейергә кейеме лә булмағас, ниндәй ожмах булһын инде яратҡанының ҡыуышы? Бәләкәйҙән мул, етеш тормошта үҫкән һеңлем кейәү, балалар менән йәшәгәндә лә мохтажлыҡ кисермәне бит. Тимәк, мохтажлыҡ уның өсөн булмаған, мөхәббәттәре ошо һынауҙы ла үтә алманы бит.

Ә тәүге ире, балаларының атаһы, ни тиклем киң күңелле булмаһын, тубыҡланып ғәфү үтенһә лә, һеңлебеҙҙе кисермәне. Балалары ла ғәфү итмәне...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәш ҡыҙ баланың, ғаилә ҡиммәттәре - мөхәббәт, татыулыҡ, бер-береңде хөрмәт итеү, тигәне күңелгә яҡын, аңлайышлы. Ошо мәңгелек хәҡиҡәт барыбер ҙә бала саҡтан беҙҙең һәр беребеҙҙең күңеленә уйыла. Икенсе әңгәмәсебеҙ әйтмешләй, йәшәй-йәшәй үҙгәрергә лә мөмкин ул хәҡиҡәт. Ә шулай ҙа күпселек ғаиләләрҙә ул үҙгәрмәй - шуныһы ҡыуаныслы. Ә әлеге апай һөйләгән меңгә бер осраған яҙмыштан һығымта яһарға кәрәкмәйҙер. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

***✓ Кистәрен ярты сәғәт самаһы ихатала йөрөп, бер ятып, бер тороп, өй эсендә мөйөштән-мөйөшкә атлап, рәшәткәле тәҙрә төбөндә йондоҙ сәскәгә ҡарап зарығып үтә көндәре Рәүефтең.***

**Әмир ӘМИНЕВ**

# ЙОНДОҘ СӘСКӘ

## Повесть

Бейәләй ҙурлыҡ йоҙаҡты еңел генә асты "ҡара ҡарға". Ҡалын, ауыр ишектең уртаһын арҡырыға быуған яҫы тимерҙәгеһен дә асты ла, уны бер яҡҡа ырғытып, ишекте тартты. Үҙе алдан инеп, Рәүефте эскә һөйрәне. Бығауын систе, көн итеүең ошонда, тигәнде белгертеп, ҡарашы менән өй эсен байҡаны.

Өй эсе ярайһы уҡ иркен ине. Ишектән уң яҡлап - иҫке генә ике ағас ултырғыс, буяуы ҡупҡан йомро өҫтәл, ҡашығаяҡ кәштәһе; иҙән уртаһында - ҡалын таҡталарҙан ҡағылған оҙон өҫтәл, күптән ағартылмаған, йүшкә аҫты, плитә алды ҡоромға ҡарайған урыҫ мейесе. Стенаға эленгән йомро көҙгө, иҫке генә кейем элгес тә бар. Төптәрәк киң тимер карауат, диван. Ике тәҙрә төбөндә һулыған ике гөл ултыра, бөтә тәҙрәләр ҙә тыш яҡлап рәшәткәле. Тимәк, элек бында кемдәрҙер йәшәгән, улар бынан бер нәмә лә алмай күсеп киткән йә һөргәндәр ҙә йорттарын тотҡондар өсөн файҙаланғандар, әле лә файҙаланалар, тип фаразларға ҡала.

- Ниңә, ни өсөн? - тип һораны Рәүеф, өй эсен байҡағас. - Бер нисә һорау биреү өсөн мотлаҡ ошонда килтерергә кәрәк инеме ни?

Һаҡсы өндәшмәне.

- Был сәйәси һөргөн тип аталамы?

- Уныһы миңә ҡараңғы. Беҙҙең эш - һеҙҙе килтереп урынлаштырыу. Ҡалғанын белмәйем.

- Ә нимә ҡылдым һуң бында килтереп ябырлыҡ?

- Ярай, Юламанов, диван, карауат, өҫтәл бар, түшәкфәләнде анау шкафтан табырһың. Ризыҡ, һыу, башҡа кәрәк-яраҡ индерерҙәр. Ҡашығаяҡ, ана, кәштәлә.

Һаҡсы Рәүефтең һорауына яуап бирмәне. Ҡабаланмай ғына сығып китте. Тыштан шарт та шорт тимер һайғауҙы терәүе, унан ишекте бикләүе ишетелде. Рәүеф, иҙән уртаһына баҫып, өй эсен йәнә бер күҙҙән үткәрҙе лә, ултырғысҡа сүгәләп, ҡурғаштай ауыр уйҙарға сумды.

Кисә төн уртаһынан башланып ошо өйгә бикләнеүенә тиклемге ваҡыт арауығындағы ваҡиғалар уға төштә генә булған кеүек. Уяу килеш күргән төштә. Сөнки уларҙың ысынбарлыҡ икәненә һис ышанырлыҡ түгел. Ҡайҙалыр ситтә, әйтәйек, Латин Америкаһының берәй илендә, хатта икенсе планетала булған кеүек барыһы ла. Нишләп улай ҡапыл ғына ҡулға алыуҙар башланды? Ауылда, уҡытыусылар араһында бер нәмә лә ишетелмәне, һүҙ-хәбәр, имеш-мимеш йөрөмәне. Ғәҙәттә, буласаҡ ниндәйҙер үҙгәреш алдынан халыҡ барыбер ҙә һиҙенә, һүҙ йөрөтә, фекер алыша торғайны. Илдә берәй төрлө переворот яһалып, власҡа хәрбиҙәр йәки оппозицияла торған көстәр килдеме? Юҡ, бөгөнгө системала быны булыуы мөмкин түгел. Хәрбиҙәр быны булдыра алмай, оппозицияның реаль көсө юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, оппозиция ла юҡ. Бер аҡыллы кеше әйтмешләй, Рәсәйҙе аҡыл менән һис аңларлыҡ түгел.

Ил менән, ярар, уныһы - ҡараңғы, ә Рәүефтең үҙенең яҙмышы менән аныҡ кем шаярҙы икән һуң? Ул етәксе түгел, баш ҡаланан йыраҡ ятҡан бер ауыл мәктәбенең ябай уҡытыусыһы. Уның һүҙ-хәбәренән, ҡырыныраҡ әйтелһә лә, ил именлегенә бер ниндәй зыян килмәй. Сөнки уның, уның ише ябай кешеләрҙең "эше" себендең тәҙрә быялаһын ватып тышҡа сығырға маташыуына бәрәбәр. Илдә ябай кешенең бер нәмәгә хоҡуғы юҡ, ул - көтөүҙәге бәрәмек, һоро масса...

Әллә уның менән берәй тикшереү үткәрергә ниәтләнәләрме? Ғалимдар лаборатория шарттарында сыскан, ҡуян, башҡа мал менән төрлө тәжрибәләр яһай бит, шуның ише, уны ла һынау объекты рәүешендә файҙаланмаҡсылармы? Йөрөйһөң инде шунан зомби йә маңҡорт һымаҡ. Йөрөһәң ярай ҙа, бөтөнләй аяғыңды һуҙмаһаң...

Тамам ҡараңғы төшкәс кенә ауыр уйҙарынан әҙерәк арына алды Рәүеф, дөрөҫөрәге, ҡапыл алдына килеп баҫҡан мең һорауҙың береһенә лә яуап таба алмаҫын аңлап, ҡул һелтәне лә урынынан ҡалҡынды. Асыҡҡайны, һыуһағайны. "Ҡара ҡарға"ның ишекте йоҙаҡлап китеүен белһә лә, тәүҙә уны этеп ҡараны, унан тәҙрә алдына барып баҫты. Рамдар икешәр ҡатлы, быялалары ябай түгел, ҡалын, бәлки, ватылмай торғанылыр ҙа әле. Тимер рәшәткәләр бармаҡ йыуанлығы арматуранан йәбештерелеп, тыш яҡтан стеналарға ҡаҙаҡланған. Ватып сығып ҡасыу хаҡында хыял да итмә...

Эстәге йыһаз-әйберҙәрҙе ҡарай-барлай торғас, ҡапыл үҙенең донъяһы иҫенә төштө лә, күңеле һыҙылып ҡуйҙы, шунан Сәғиҙәһенә шылтыратып ҡарарға булды. Номерына баҫып, телефонын ҡолағына килтергәйне, ҡатынының түгел, йәнә баяғы ирҙең ҡалын, ҡырҡыу тауышы ишетелде:

- Юламанов, мин һиңә шылтыратмаҫҡа ҡушҡайным бит. Тағы ла йыйһаң, телефоныңды кереп аласаҡмын. Аңлашылдымы?

- Мин һис юғы иҫәнлегемде ғаиләгә белдерергә тейешмендер бит? Нишләп тыяһығыҙ, ни хаҡығыҙ бар? Улар мине ҡайҙа алып киткәндәрен дә белмәй... Улайһа, үҙегеҙ хәбәр итегеҙ...

Бәйләнеш өҙөлдө. Тораҡ мәктәп директорының номерын йыйғайны, шул уҡ яуапты алды. Шымсылыҡ итер өсөн ҡалдырғандар, тимәк, телефонын да, юғиһә, тартып алырҙар ине. Хәрбиҙәрҙең йәки дәүләт именлеге органдарының техникаһы башҡаса һәм юғары кимәлдә, әлбиттә... Бер йөрөй, бер ултыра торғас, асығыуы йәнә эсен борғолай башланы. Ҡашығаяҡ, көрөшкә, үтмәҫ бысаҡ, сынаяҡ урынлаштырылған кухня шкафынан быяла банкыға һалынған тары ярмаһы, әҙерәк он, кибеп бөткән ике баш һуған, лавр япрағы, тоҙ тапты. Иҙәндәге алюмин бидон төбөндә һыу ҙа бар икән. Һыу, күренеп тора, әллә ҡасанғы, буйраҡланып бөткән. Нишләһен, эсте инде, яман сарсағайны. Өҫтәл аҫтында ултырған электр плитәһен алды ла, проводын ҡараштырып, розеткаға тыҡты. Спираль тиҙ арала йылынып, ҡып-ҡыҙыл булды. Иҫке генә алюмин кәстрүлгә әҙерәк һыу ҡойоп, тары ярмаһын төшөрҙө...

Ҡапҡылап алғас, сисенеп тә тормай, түшәк-фәлән дә йәймәй, диванға бөгәрләнеп ятты һәм шундуҡ йоҡлап та китте. Арыуы еңде. Төн уртаһында өшөп уянды. Уянғас, ҡайҙа ятҡанын аңғармай бер булды. Ут яндырыуҙан ниңәлер ҡурҡты. Һаҡсы әйткән шкафтан түшәкте барып алырға иренде. Өшөй-өшөй ятты ла тағы йоҡлап китте. Алама төштәр күрҙе, баҫлығып йонсоно, ҡысҡырҙы, һөрәнләне, Сәғиҙәһен ярҙамға саҡырҙы. Һуң ғына уянды. Ҡырылмаһа-ҡырҡ уянғас, тәне лә, йәне лә ял итмәне, киреһенсә, башы ауыртып килеп торҙо.

"Ҡара ҡарға" килде. Сепрәк сумкала - аҙыҡ-түлек. Алюмин бидонды алып сығып, ҡайҙандыр һыу тултырып индерҙе. "Һыуҙы ҡайҙан алдың, яҡынтирәлә юҡ таһа?" тигәнгә яуап бирмәне, "Бер электр бағанаһы күренмәй, ә ут бар", тип аптырауына ла яурындарын ғына һикертте. Өс көнгә бер шулай ризыҡ индеререн, көнөнә өс мәртәбә - иртән, төш, кис - бәҙрәфкә сығарасағын әйтте. Уның һағында кистәрен ихатала йөрөп кереү мөмкинлеге лә бар икән. Быныһы - тотҡондоң теләгенә ҡарап. Ә бына ҡасанға тиклем тотасаҡтарын, ниндәй ғәйеп таҡҡандарын һәм ни өсөн тап ошонда килтергәндәрен ныҡыһа, шулай уҡ, "белмәйем" тигәнде аңғартып, яурынын ғына йыйырҙы.

Ҡалдырылған ризыҡ - ике буханка ҡара икмәк, көнбағыш майы, тоҙ, ит банкыһы, ҡарабойҙай, дөгө ярмаһы. Тимәк, үҙе бешерергә, үҙенең тамағын үҙе хәстәрләргә тейеш була Рәүеф...

Һаҡсының тағы бер ингәнендә Рәүеф: "Әйт, нимәгә бында ултыртып ҡуйҙылар мине, суд йә тәфтишсе инмәйме ни, һорау алмайҙармы, кемгә мөрәжәғәт итергә һуң?" - тип йәнә төпсөнгәс, теге, талапүтенестәрегеҙҙе яҙып бирегеҙ, етәкселеккә тапшырырмын, тип бер көн ҡағыҙ, ручка бирҙе. Рәүеф, оҙаҡҡа һуҙмай, ҡулға алыныуының сәбәбен, ниндәй ғәйеп таҡҡандарын, ҡасанға тиклем ултырасағын әйтеүҙәрен талап итеп, асыулы хат яҙҙы. Паспорт мәғлүмәттәрен, ҡайҙа һәм кем булып эшләүен, "минең турала шунан һорай алаһығыҙ" тип, мәктәп директорының исемшәрифен, телефонын, тулы адресын яҙҙы, үҙенең ҡайҙалығын ғаиләһенә хәбәр итеүҙәрен, кеҫә телефонын тыңламауҙарын, өйө менән бәйләнешкә инергә ҡамасауламауҙарын һораны. Икенсе бит ҡағыҙға мотлаҡ кәрәк булған көнкүреш әйберҙәр, кейем-һалым исемлеген теҙҙе. Тотоуҙары оҙаҡҡа һуҙылһа, көндәр һалҡынаясаҡ, өйөнән йоҡа кейенеп килгән...

Яҙғандарын тотторып сығарғандың бишенсе көнөнә резина итек, ҡалын табанлы ботинка (быларын һорамағайны), иҫке кейем-һалым, фуфайка, бүрек, буйлы-буйлы арестант пинжәге менән ыштаны, башҡа ваҡ-төйәк, ашанты индерҙеләр, ә яҙмышына ҡағылған бер һорау-талапҡа ла яуап юҡ. Миңә беренсе нәүбәттә шулары кәрәк тәһә, тип һорағайны, һаҡсы, улары минең вазифаға кермәй, мин үтенесегеҙҙе етәкселеккә тапшырҙым, тиеү менән сикләнде. Шулай булырын Рәүеф самалай ине инде, ләкин, был тиклем дә оҙаҡҡа һуҙырҙар, тип уйламағайны. Айға яҡын, бәлки, унан да оҙағыраҡтыр, ваҡыт үтте, яуап һаман юҡ. Булмаҫ та, ахыры...

Шулай итеп, аҫҡа үлмәҫлек кенә туйынып, көнөнә өс мәртәбә бәҙрәфкә сығып килеп, кистәрен ярты сәғәт самаһы ихатала йөрөп, бер ятып, бер тороп, өй эсендә мөйөштән-мөйөшкә атлап, рәшәткәле тәҙрә төбөндә йондоҙ сәскәгә ҡарап зарығып үтә көндәре Рәүефтең.

Бер көн ҡолағына машина геүләүе салынды. Быға тиклем дә ишетә ине, әммә улар өйҙән йыраҡтан үтте шикелле, тоноғораҡ ине тауыштары. Ә был юлы ап-асыҡ ишетелде. Минең арттан килмәнеләрме икән, тип йүгереп тигәндәй барып тәҙрәгә ҡапланды. Өс "ЗИЛ" машинаһы урман ауыҙына килеп туҡтаны. Туҡтауын-туҡтаны, әммә кабинанан да, кузовтан да төшөүсе оҙаҡ булманы, ниңәлер. Әйтерһең дә, кемде ҡалдырырға белмәй, аптырашып ултыралар. Ниһайәт, иң арттағы машинаның кабинаһынан "ҡара ҡарға" төштө лә, кузовтың артҡы бортын асып, эстән һонолған тимер баҫҡысты алып терәп ҡуйҙы. Өҫтән, Рәүефте тамам ғәжәпкә һалып, йәш кенә ҡатын килеп төштө! Әллә Сәғиҙәһеме? Буй-һыны, хатта пальтоһы, ябынған яулығына тиклем уныҡына оҡшаған. Юҡ, ул түгел, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы.

Ҡайһы аралалыр йәнә бер "ҡара ҡарға" пәйҙә булды - әллә машинанан төштө, әллә машина артынан килеп сыҡты, Рәүеф шәйләмәй ҡалды - ҡатындың терһәгенән тотоп, өй яғына әйҙәне. Үҙен ҡайҙа килтереп төшөргәндәрен хәтерендә ҡалдырырға теләгәндәй, ҡатын алан-йолан ҡарана, сырмалсыҡ үләнгә эләгеп, бер нисә мәртәбә саҡ һөрлөгөп йығылып китмәне, һуңғы сиктә һаҡсының беләгенә аҫылынып өлгөрҙө. Ҡулында төйөнсөгө лә бар. Өйгә килеп еткәс, һаҡсы шарт та шорт йоҙаҡты асты. Өй эсенә тәүҙә ҡатынды үткәрҙе, унан үҙе килеп инде.

- Юламанов, яңғыҙыңа күңелһеҙ булмаһын өсөн һиңә иптәш ебәргәндәр, - тине "ҡара ҡарға", - ҡатын-ҡыҙһыҙ ҡыйындыр ҙа.

Шыма йөҙөндә бер мускулы ла һелкенмәне, хатта күҙе лә йомолманы, үҙенең һөмһөҙ шаяртыуынан уңайһыҙланыу ҙа кисермәне һаҡсы. Рәүеф уның ике-өс көн аша янына кереп йөрөгән бәндәме, әллә бөтөнләй икенсеме икәнен дә айыра алманы. Сөнки улар барыһы ла игеҙәк һымаҡ бер иш ине.

- Һаумыһығыҙ, - тине йәш ҡатын шым ғына, оялып-тартынып, һаҡсы сығып ишекте бикләгәс. Иҫәнләшеүҙән бигерәк, үҙе килеп инеүҙән тыуған көсөргәнешле тынлыҡты өҙөргә теләп тауыш бирҙе шикелле.

Рәүеф алдында мөләйем йөҙлө, ҡырлас танаулы, ситтәре ҡалмыҡтарҙыҡы ише ике яҡҡа тартылған ҡыҫығыраҡ күҙле, ҡыҫҡа сәсле, тулы кәүҙәле йәш ҡатын баҫып тора ине. Аяғында - ҡыҫҡа ҡуныслы зәңгәр резина итек, өҫтөндә - өй менән мунса, лапаҫ араһында йөрөй торған көҙгө пальто. Әйтерһең дә, көтөүҙән ҡайтмаған мөстән башмағын эҙләп, ауыл осондағы әрәмәлеккә сыҡҡан. Ә бына йөҙ-ҡиәфәте бер ҙә ҡайғылы түгел һымаҡ - хәлен тулыһынса һаман аңлап етмәйҙер, ахыры.

- Арыубыҙ әле, - тип иҫәнлекте алды Рәүеф, көттөрөп кенә. - Зинданда ултырғас, арыу тип әйтеп булһа. Әйҙә, үтегеҙ, үт.

- Һеҙ бында күптәнме? - Ҡатын һаман ишек төбөндә тороуын белде. Әйтерһең, йомошҡа ғына кергән дә хәҙер сығып китә.

- Байтаҡ инде. 23 августа килтергәйнеләр. Бөгөн нисәһе?

- Ун туғыҙынсы сентябрь.

- Тимәк, айға яҡын.

- Шунан бирле яңғыҙмы?

- Эйе.

- Ҡыйындыр бит?

- Рәхәт түгел. Нишләйһең, килтереп япҡастары, ултыраһың инде.

- Оҙаҡ тоторҙармы икән?

- Белмәйем. Сығармайҙар, һөйләшмәйҙәр, допросфәләнгә саҡырғандары юҡ. Ғәйеп тә таҡмайҙар. Тулы изоляция. Ашау байҙан, үлем Хоҙайҙан, ҡыҫҡаһы, оноттолар. Нишләп алдылар һуң үҙеңде?

Кемдең юлын ҡырҡтың, ниндәй түрәгә ҡаршы һүҙ әйттең?

- Минме инде түрә-ҡараға ҡаршы һүҙ әйтә торған кеше? Уйлайым-уйлайым да, бер ниндәй ҙә сәбәп таба алмайым. Берәйһе менән бутап ҡына килтермәһәләр.

- Ҡайһы ауылдан?

Ҡатын ауылының исемен атаны. Ул ауыл Рәүефтәрҙекенән 25 саҡрым арыраҡ. Булғаны бар. Мәктәптәре спортта, бигерәк тә йүгереүҙә, саңғыла уҙышыуҙа, йылдың-йылы районда беренселекте бирмәй, республика буйынса үткәрелгән ярыштарҙа ла алдынғылар иҫәбендә. Уҡыу-уҡытыу эштәре яҡшы ҡуйылған - һәр сығарылыштан кластарының яртыһы самаһы юғары уҡыу йорттарына керә. Ауылдарынан Салауат тигән шағир, Һиҙиәтов тигән йырсы сыҡҡан, бер фән кандидаты ла бар.

- Нинә улай йыялар һуң халыҡты? Өс ҙур машина башы лыҡа тулы кеше. Килә-килә, берәү-икәүҙе төшөрөп ҡалдыралар, улар урынына икенселәрҙе ултырталар, йәнә туҡтайҙар ҙа тағы төшөрәләр, тағы алалар. Һәр ерҙә уларҙы көтөп, ҡаршы алып торған ҡара кейемле кешеләре лә бар. Ул ҡәҙәре халыҡты ҡайҙа таратып бөтмәк кәрәк? - Ҡатын ихлас ғәжәпләнде.

"Бына быныһы - етди һорау, һөйләшеүҙең төп темаһы",- тип уйланы Рәүеф, уның кем, ҡайҙа эшләүен самаларға тырышып. Уҡытыусы түгел, берәй ойошма, әйтәйек, ауыл хакимиәте тирәһендә эшләгән кешегә лә оҡшамаған. Сауҙа тирәһенәндер, тиһән, үтә бер ҡатлы күренә. Әллә шулай булып ҡылана ғынамы?

- Ил ҙур, ҡайҙа тығырға белерҙәр. Барыһын да алдан хәстәрләгәндәрҙер - мәктәп һалмайынса бала йыймайҙар.

- Ниндәй мәктәп? - Ҡатын аңламаны.

- Образлы әйтәм. Хөкүмәт уйламайынса бер нәмә лә эшләмәй. Ауылдан, ҡаланан берәмләп йыйып, йыйғанды ҡайҙалыр таратып, ябып йөрөү өсөн алдан уҡ ошо йорт ише урындар әҙерләгәндер, тим.

- Ауылдан, ҡаланан йыя башлаһалар, ай-яй, яман күп килеп сыға түгелме һуң? - Ҡатын йәнә ғәжәпләнде.

- Күп инде. Илде зинданға әйләндерәләр.

Шуны әйтеүе булды, башына ҡылт итеп бер уй килде: әгәр үтә ябай тип хисаплаған был мөләйем ҡатын уның янына махсус индерелгән шымсы булып сыҡһа? Машиналар өй эргәһенә килеп туҡтағас, уны таба алмай ана нисек оҙаҡ мәшәҡәтләнделәр. Был - бер. Икенсенән, нинә һаман һорау алырға саҡырмайҙар йәки тәфтишсе инмәй? Тимәк, унан кәрәкле мәғлүмәт һурыу өсөн ошо ҡатынды көткәндәр. Бына килде, алдында баҫып тора. Юҡ-бар менән ҡыҙыҡһынған, һораған булып, тегеләргә мәғлүмәт йыясаҡ... Һаҡ ҡыланырға кәрәк, артығын ләпелдәү ярамаҫ.

Танышыу-һөйләшеүҙең аяғөҫтә өлөшө ошоноң менән тамамланды. Ҡатын пальтоһын, яулығын систе, төйөнсөгөн ултырғысҡа ҡуйып, эсенән күлдәкме, халатмы, унан бәләкәй көҙгө, тәрәнеү-биҙәнеү әйберҙәре сығара башланы. Ҡатын-ҡыҙ ҡайҙа ла ҡатын-ҡыҙ булып ҡала инде, тип көләмһерәне эстән генә Рәүеф, һыуға батып барғанда ла сәсен төҙәтер, иренен буяр. Шул уҡ ваҡытта күңеленә инеп оялаған шиге арта төштө: шпион! Кәрәк-ярағын нисек алып өлгөргән? Тимәк, алдан әҙерләнгән, белгән ҡайҙа барырын, тимәк, махсус задание үтәү өсөн ебәрелгән разведчик! Ана, Рәүеф йоҡа ғына плащынан, фуражкаһынан башҡа бер ниндәй кейем дә йыйып өлгөрә алманы. Уныһын да Сәғиҙәһе иҫкәртте, юҡһа, күлдәксән сығып китә ине.

Ҡатын сепрәк-сапрағын ултырғыс башына тәҫләп элде, биҙәнеү-яһаныу әйберҙәрен көҙгә алдына теҙеп ҡуйҙы, шунан, итектәрен сисергәме-юҡмы тигәндәй, аяҡтарына ҡарап торҙо-торҙо ла, тилберләнеп эҙләнергә кереште. Ҡата-фәлән ҡарай, тип фекер йөрөттө Рәүеф. Эҙләй торғас, кәрәген тапты бит: диван аҫтынан баштары ҡалтағайға әйләнгән иҫке тапочкалар тартып сығарҙы ла, ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, аяҡтарына кейеп тә ҡуйҙы!

- Йә, ағай, танышайыҡ! - тине шунан, күнелле генә итеп. Көлгәндә бит осталарында соҡорҙар хасил булды, тигеҙ аҡ тештәре ялтыраны. Килешә ине көләү ҡатынға! Хәс тә йәш тай инде, өйрәтелмәгән, ҡулға эйәләштерелмәгән тайса! Уның етеҙ хәрәкәттәрен күҙәткән Рәүефтә ҡапыл ирлек теләге уянды, ҡаны ҡыҙҙы. Ҡатын, уның ҡыҙышыуын һиҙгәндәй, эйәлеп, йәнә аяҡтарына ҡараны, ҡулдары менән күлдәген һыпырып, теүәл буй-һынын белендерҙе, сәстәрен төҙәткеләне. Былай ҡайғырып ултырыу килешмәҫ, ҡасан сығарырҙары билдәле түгел, тиһегеҙ, шулай булғас, - ҡатын кәрәкле һүҙен таба алмай берауыҡ тотлоғоп торҙо, - донъя көтөргә кәрәк. Ағай, исемегеҙ кем була?

- Рәүеф.

- Рәүеф, ти? - Ҡатындың күҙҙәре маңлайына һикерҙе, үҙе артҡа ҡайҡайып китте лә тотлоғоп-сәсәп көлөргә тотондо. Төрмәлә түгел, әйтерһең, ҡунаҡта ултыра. - Ә мин - Рәүфә.

Хәҙер Рәүеф көләргә керешә, исемдәренең тап килеүенә аптырауҙан бигерәк, ҡатындың шулай кинәнеп көлә белеүенә һоҡланды. Гел баш баҫып, хәсрәтләнеп йөрөү ялҡытып та киткәйне, тамам өмөтһеҙлеккә бирелеп, башты әллә элмәккә тығырға ла ҡуйырғамы, тигән мәлдәре лә булманы түгел, шуға күңеле яңырып, кинәнеп көлдө лә ҡуйҙы.

- Рәүеф плюс Рәүфә тигеҙ була мөхәббәт! Мәктәптә мине шулай тип үсектерә торғайнылар.

- Унда ла Рәүеф бар инеме ни?

- Бар ине шул параллель класта. Тәнәфестә янға килә лә текәлеп ҡарап тик тора торғайны.

- Ә һин иғтибар итмәнең инде?

- Юҡ. Ул маңҡаға нисек иғтибар итәһең? Етмәһә, бәләкәй кәүҙәле, ҡолаҡтары дегәнәк япрағы һымаҡ ҡарпайып тора. Янымдан төрткөләп, әрләп ҡыуа торғайным. Ҡыуһам, күҙ йәше менән илай.

- Меҫкен аҙаш. Һинең мыҫҡыллауҙарға нисек түҙгән, тиң? Мин уның урынында булһам, атылыр ҙа үлер инем. Хәҙер ҡайҙа инде ул маңҡа?

Ҡатын, үкенес белдереп, ҡулын һелкте, йөҙөнә һүрәнлек ятты, нимәлер әйтергә ыҡталғайны ла, өлгөрмәне - ишеккә һуҡтылар.

- Иптәшкә өсөнсө кешене лә килтерҙеләр, - тине Рәүфә моңһоу ғына. Үҙе һағайып, ишеккә текәлде.

- Күнелле буласаҡ.

Әммә ҡағыу ҡабатланманы. Күп тә үтмәй, ете-һигеҙ йәштәр самаһындағы ике малайҙың алмаш-тилмәш тәҙрәнән үрелеп ҡарағаны, унан, шарҡылдап көлә-көлә, йорттан ситкә китеңкерәп, маймыл һымаҡ ҡылана-һикерә урман яғына йүгергәне күренде. Бала-саға йөрөгәс, яҡында ауыл барҙыр, тигән һығымта яһаны Рәүеф. Ололарҙың килеп сығыуы ла ихтимал. Тимәк, бөтөнләй ҙә яңғыҙ түгелдәр, ул ҡәҙәре лә алыҫҡа алып китмәгәндәрҙер. Хәйер, бикле ултырғас, уларҙың булыу-булмауының, йөрөү-йөрөмәүенең файҙаһы юҡ, барыбер асып сығара алмайҙар. Тирә-яҡта тормош бар, кеше йөрөп ята, тип кенә үҙ-үҙенде тынысландырмаһаң...

Ә бына Рәүфәнең килеүе яҡшы булды. Ул инде, иптәш булыуҙан тыш, эс бошорғос яңғыҙлыҡтан ҡотҡарҙы, һөйләшеп-аралашырға мөмкин, ашарҙарына бешереп-төшөрөр ҙә әле, юҡһа, был эштән тамам ялҡҡайны.

**(Дауамы. Башы 31-се һанда).**

ЗАУЫҠ

**Тимер НИӘТШИН**

# БАЛА ТЫУҒАН ҺАЙЫН АҠ БИЛӘҮГӘ

## Йомарлана, гүйә, быуаттар...

### Ваҡыт тирмәне

Кемдәр генә миңә осраманы,
Кемдәр генә аҡыл бирмәне.
Таҙа орлоҡ менән буш кәбәкте
Тарта торҙо ваҡыт тирмәне.

О, был тирмән, көнө-төнө тимәй,
Һин йәшәйһең икән, тарта ул.
Тоҡтар һымаҡ йылдар теҙелгәндәр,
Яҙмыш йөгө яйлап арта ул.

Ишек яңағына тамға киртеп,
Ҡабаланып үтте баласаҡ.
Тормош өҫтәлендә был ашҡыныу
Тәмле ҡалас булып ҡаласаҡ.

Сәс бәйләнгәс, 35 йыл инде
Был тирмәнгә икәү киләбеҙ.
Өмөт менән орлоҡ сәсәбеҙ ҙә,
Шатлыҡ менән уңыш игәбеҙ.

Һинең ҡулың оҫта, йылдамыраҡ,
Уйҙарың да яҡты, изгерәк.
Ҡайсаҡ тоғом еүеш, сүпле булһа,
Һинә ҡуша һалам тиҙерәк.

Ваҡыт тирмәненә беҙҙең менән
Килә бергә бала-сағалар.
Ишлә яҙмыш - бик уңышлы яҙмыш,
Гөрләп-йырлап йылдар ағалар.

Яҙмышым аҡ, сәсем дә он бөгөн,
Аһ-зарҙарға урын бирмәнем.
Ишегендә оло өмөт менән
Асам әле, ваҡыт тирмәне.

P.S.
Һәр яҙмыштың башы, осо була,
Йылдарҙың да сикле иҫәбе.
Көн-төн тартҡан ваҡыт тирмәненә
Рәхмәт әйтеп, беҙ ҙә китәбеҙ.

### Күрер әле

Димселәй серле йылмайып,
Күктә ай йөҙөр әле.
Һандуғастың һағыштары
Үҙәкте өҙөр әле.

Йондоҙҙар йыйған усаҡтан
Тылсым аҡһылыр әле.
Күнелдәрҙең ҡылдарына
Сиртер-ҡағылыр әле.

Күҙҙәреңде йома биреп,
Тынып ҡалырһың әле.
Тертләп торған һулышыңды
Йыш-йыш алырһың әле.

Һөйөү беҙгә сымылдығын
Сәскәнән үрер әле.
Ошо мәлдә Мәңгелекте
Күнелдәр күрер әле.

### Йырың бар

Ҡисен тауға сығып ултырайыҡ,
Йондоҙҙар ҙа асыҡ йымылдар.
Зәңгәрерәк булыр киске һауа,
Үтеп китер һымаҡ был йылдар.

Ҡулға-ҡул тотоноп менеп еттек,
Йәшәй торғас, ғүмер тауына.
Төҫмөрләнә офоҡ ситтәре лә,
Эңер төшә күҙҙең яуына.

Тау итәге буйлап йылға аға,
Гүйә, зәңгәр таҫма һуҙылған.
Бормаланған йылға үҙәнендәй
Беҙҙең ғүмер юлы һуҙылған.

Маңлайҙағы тәрән йыйырсыҡтар
Ташҡындарҙан ҡалған йырындар.
Ярныу күңел, бәлки, тынысланыр,
Һуҙып ебәр - моңло йырың бар.

### Зимагорҙар иле

*Аямаған йәнен, түккән ҡанын,*
*Һис бирмәгән башҡорт Уралын.*
*Халыҡ йырынан.*
*Зимагор булып эшләнем,*
*Бер нужа ла күрмәнем.*
*Ҡараңғы төн, ямғыр яуа,*
*Өҫтөмдә бер күлдәгем.*
**Зимагор йырынан.**

Башҡортостан - зимагорҙар иле,
Ҡотоң оса ошо һүҙҙәрҙән.
Тонсоғаһың, һауа етмәгәндәй,
Ҡара ҡайғы тыуа күҙҙәрҙә.

Беҙ беләбеҙ: менәр йылдар буйы
Яҡлау тапҡан башҡорт Уралда.
Һаҡлау тапҡан йәбер-золомдарҙан,
Аҙашмаған ажғыр буранда.

Нинә бөгөн сикһеҙ Себер буйлап
Гүйә ҡамғаҡ-башҡорт тәгәрләй?
Үҙ илендә нинә тамыр йәймәй,
Кем алдата уны, ҡәһәрләй?

Типһә тимер өҙөр аҫыл ирҙәр,
Ҡоралайҙай етеҙ, һылыуҙар,
Ят тупраҡҡа ятҡан орлоҡ кеүек,
Ҡалҡып китә алмай һулыйҙар.

Балалары яңғыҙ - етем инде,
Ҡатындары яңғыҙ - тол инде.
Милләт өсөн нигеҙ-ғаиләләр
Шартлап өҙөләсәк ҡыл инде.

Нурға сумған хәтфә болондарың,
Орлоҡ көткән йомшаҡ бураҙнаң.
Һуғарылмай хәләл тирең менән,
Ташландыҡ ер булыр бер аҙҙан.

Башҡорт аты, шифа башҡорт балы,
Данлы тарих, ҡурай, бейеүе.
Был мираҫтың кем ҡәҙерен белә?
Был һорауҙы ауыр бирееү.

Башҡортостан - зимагорҙар иле,
Ҡотоң оса ошо һүҙҙәрҙән.
Әллә заман шулай үҙгәрәме,
Әллә инде башҡорт үҙгәргән?

### Аралар

Таяҡ таянған әбей ҙә,
Таяҡ таянған бабай.
Кеткелдәшеп көләшәләр,
Аралар яҡын, ябай.

Тулған айҙай күҙҙәре лә,
Наҙҙай ялҡын һүҙҙәре.
Ике йәш йөрәк ҡауышҡан -
Мөхәббәтле үҙҙәре.

Ә бына был икәү - яңғыҙ,
Бер түшәк бүлһәләр ҙә.
Бәхеттең һөйөү-һөйөләү
Икәнен белһәләр ҙә.

### Бала

Бала тыуған һайын аҡ биләүгә
Йомарлана, гүйә, быуаттар.
Һүтелергә әҙер был йомғаҡта
Сиселергә әҙер сер ята.

Ғүмер шишмәһенең арбар моңо
Аҡ биләүгә үтһә ҡағылып.
Тағы бер яҙмыш миҙгелдәре
Ваҡыт көҙгөһөндә сағылыр.

Ниндәй төҫтәр, ниндәй яңы хистәр
Яралырҙар ошо яҙмыштан.
Әсәһе уның ғорур йылмайырмы,
Әллә һарғайырмы һағыштан?

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ГАЗЛЫ ҺЫУ...

## һимертә

● Нисек итеп дарыу һәм уколһыҙ ауыртыныуҙан ҡотолорға? Был осраҡта дөрөҫ туҡланыу ярҙам итер, тип иҫбатлай белгестәр. Тәү сиратта, таҙартылмаған орлоҡтан эшләнгән (цельное зерно) аҙыҡ-түлеккә иғтибар итергә кәрәк. Улар үҙҙәрендә мускулдар ауыртыуын баҫырға һәләтле магний һәм аш һеңдереү процесын көйләүсе матдәләр туплай.

Индия медицинаһында әллә күпме быуат дауамында ауыртыуҙы баҫыу өсөн имбир һәм куркума уңышлы ҡулланыла. Ә зәйтүн майын һәм һөмбаш балығын (лосось) донъя ғалимдары сыҙамлылыҡты арттырыу өсөн ҡулланырға кәңәш итә. Шулай уҡ сәтләүек, ер еләге, йәшел үҫемлектәр, һөт аҙыҡтары ашау һәм виноград һуты эсеү ҙә ауыртыуҙы баҫырға һәләтле.

● Һуңғы тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, бер ай дауамында газлы һыу эсеү һимереүгә "юл аса" икән. Был осраҡта кеше организмы үҙгәреү кисерә: ул кәрәкле энергияны аҙыҡтан түгел, ә газлы һыуҙағы шәкәрҙән ала башлай, ә "кулланылмаған" майҙар, үҙ сиратында, организмда туплана. Был исемлеккә бөтә төр шәрбәтле һыуҙар, шул иҫәптән емеш-еләк һуты ла инә, тип белдерә ғалимдар.

Шулай уҡ Америка ғалимдары газлы һыуҙың ғүмер оҙайлығына ла тәьҫир итеүен билдәләй. Бындай һыу эсергә әүәҫ кешеләр бер-нисә йыл ғүмерҙәрен юҡҡа сығара, ти улар. Статистика күрһәтеүенсә, һуңғы 10 йылда газлы һыу эсергә яратыусылар һаны артҡандан-арта. Ә был, үҙ сиратында, диабет менән ауырыусылар һанын Америкала ғына 130 меңгә, ә йөрәк сирҙәренән яфа сигеүселәрҙе 14 мең кешегә күбәйткән.

Газлы һыу шулай уҡ кариес барлыҡҡа килеүҙә лә ҙур "роль уйнай", сөнки унда төрлө кислота, шәкәр һәм тәмләткестәр күп. Һөйәктәрҙән кальцийҙың "йыуылыуына" ла булышлыҡ итеүсе бындай зарарлы һыуҙарҙы ҡулланыуҙан ғалимдар бөтөнләй баш тартырға саҡыра.

● Белгестәр ҡабаланып ашау менән икенсе типлы шәкәр ауырыуы араһындағы бәйләнеште асыҡлаған. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, аҙыҡты тиҙ сәйнәп йотоу 2,5 тапҡырға тиҙерәк һимереүгә килтерә, ә был, үҙ сиратында, шәкәр диабеты барлыҡҡа килтереүҙең бер сәбәбе булып тора.

● Ғалимдар белдереүенсә, шәкәрҙе бал менән алмаштырыу кешенең кәйефен күтәреп кенә ҡалмай, ә матурлыҡты һәм йәшлекте һаҡлауға ла нигеҙ булып тора. Бының өсөн көнөнә ике балғалаҡ бал ашау ҙа етә. Бал үҙ составында күп төрлө витаминдар һәм микроэлементтар туплаған. Улар рәтенә С һәм В төркөмөнә ҡараған витаминдар, кальций, тимер, магний, фосфор, калий, натрий, цинк инә. Шулай уҡ тән янған осраҡта ла бал йүнәлеү ваҡытын күпкә кәметеп, файҙа килтерә. Тағы ла бал һыуыҡ үткәндә һәм грипп менән ауырығанда ла ҙур ярҙамсы, сөнки бал составында хроник тымау барлыҡҡа килтереүсе төрлө бактерия һәм вирустарҙы юҡ итеүсе матдәләр бар.

САУАПЛЫЛАР

**Хәйбулла районының Оло Әбеш ауылынан 5-6 саҡрым ситтәрәк Төрткән ауылы урынлашҡаны билдәле. Уны Бәләкәй Әбеш тип тә атайҙар. Хәҙерге ваҡытта унда өс кенә өй тороп ҡалған, ауылда бер кем дә йәшәмәй. 1937 йылда шул ауылда йәшәүсе Юнысов Әхмәтшәриф атлы ир-уҙаманды Оло Әбешкә указлы мулла итеп саҡырырға иткәстәр, Ниғмәт атлы бер мулла: "Унда барып нимә эшләйһең, Әхмәтшәриф ҡоҙа? Донъялар бит хәтәр яҡҡа үҙгәреүгә тора. Бөгөн зыярат эргәһенән үтеп барһам, унан бер ҡара эт килеп сыҡты ла, ауылға тиклем артымдан ҡалмай эйәрҙе", - тип, уны Оло Әбешкә указлы мулла булып барыуҙан тыйырға теләгән. Ә был көндәргә ул ошо кара эт һынында күргән дә инде Ниғмәт мулла. Ошо хәлдән һуң көтмәгәндә Әхмәтшәриф вафат булып ҡалған һәм, күп тә үтмәҫтән, тарихта дәшһетле шәхес культы тип нарыҡланған репрессиялар башланған һәм дин әһелдәренең барыһын да ҡулға алғандар. Әхмәтшәриф вафат булғандан һуң нык ҡайғырып илаған ҡатынына бер мулла: "Һин, ҡоҙағый, илама. Ярай, Әхмәтшәриф үлеп ҡотолдо, уның һөйәктәре, ана, тыуған еребеҙҙә ята, ә беҙҙең һөйәктәр ҡайҙа ятыр икән?"- тип әйткән тиҙәр. Ысынлап та, "халыҡ дошманы" тип ҡулға алынып, Йылайыр, Өфө тарафтарына оҙатылған был төбәк дин әһелдәренең, зыялыларының һөйәктәре ҡайҙа ятҡанын бер кем белмәй хәҙер. Хәйер, бындай фажиғәле яҙмыш ул саҡта бер Әбеш йә Төрткән ауылдарына ғына ҡағылмаған. Бындай яҙмышҡа тотош илебеҙ дусар булған. Шулай итеп, ул саҡта Әхмәтшәриф Юнысовҡа Оло Әбешкә указлы мулла булып килергә насип булмаһа ла, быйыл был ауылда үҙ ишектәрен асасаҡ Хоҙай йорто Әхмәтшәриф Юнысов исемен йөрөтәсәк. Уның хәҙерге ваҡытта Сорғот ҡалаһында йәшәүсе ейәнсәре, халыҡ табибәһе һәм эшҡыуар Рита Фәиз ҡыҙы Маннанова ошо көндәрҙә Оло Әбештә үҙ аҡсаһына мәсет төҙөтә башланы. Изге башланғысҡа бар ауыл халҡы ҡушылған, һәр кем, хәленән килгәнсе, матди ярҙам күрһәтә башлаған. Үҙ заманының атаҡлы муллаһы Әхмәтшәрифтең баҡыйлыҡтағы рухын, шулай итеп, бөгөн ейәнсәре Рита ҡыуандыра. Ниндәй көндәрҙә бит әле? Изге Рамаҙан айында! Был көндө тотош Әбеш ауылы халҡы оло тулҡынланыу, шатлыҡ тойғолары кисерҙе. Сираттағы Ураҙа көнө тамамланыуға бер сәғәт ваҡыт ҡалғас, йәше-ҡарты төҙөлә башлаған мәсет янына йыйылып, был изге эшкә үҙ фатихаһын бирҙе. Нык ҡыуанды әбештәр. Нимә генә тимә, замандар үҙгәреүгә ике тиҫтәнән ашыу йылдар үтһә лә, шундайын данлыҡлы үткәне, арҙаҡлы шәхестәре булған ауылдың үҙ мәсете булмауы барыһының да күңелен ҡыра килде. Сарала Әбеш ауылы хакимиәте башлығы Таһир Юнысов, мәктәп уҡытыусыһы Камил Илембәтов һәм башҡалар сығыш яһаны. Мин иһә, Рита менән осрашып, уның әңгәмәһен тыңланым.**

# ШАТЛАНАЛЫР...

## олатайҙар рухы

### Мохтажлыҡ йәшәргә өйрәтте

Бала сағымда берәр туғанымдың берәй ере ауыртһа, һыҙлаһа, мин дә ауыртына йә һыҙлана башлай торғайным. Ҡайһы ваҡыт берәйһенең сәфәргә йыйыныуын күрәм дә, уның сәфәрен кисектерергә маташам. Ул иһә аҙаҡтан юлы уңмай ҡайтып инә лә, мине әрләп ташлай ине. Хәҙер инде был йәһәттән аҡылға ултырҙым шикелле, йәғни күп кенә ваҡиғаларҙың нисек булырын алдан белһәм дә, был хаҡта кешегә туранан-тура әйтмәҫкә тырышам. Алдан тойомлауым кешенең һаулығын йә ғүмерен һаҡлап ҡалырға булышлыҡ иткәндә генә был хаҡтағы мәғлүмәтем менән уртаҡлашам.

Кешенең һәләттәре уның өсөн иң ауыр булған экстремаль хәлдә асыла, тиҙәр. Минең менән дә шулай уҡ булды. Ул саҡта Өфөлә Башҡорт дәүләт аграр университетының ветеринария факультетында 1-се курста уҡып йөрөй инем. Бала сағымдан атта һыбай йөрөүем, хайуандар яратыуым мине ошо уҡыу йортона алып килгәйне. Бер мәл мин бер тин аҡсаһыҙ тороп ҡалдым. Ул саҡта ҡыҙымдың атаһы менән айырылышҡайныҡ. Көндәлек аҙыҡ-түлек һатып алыуҙан тыш, ҡыҙымды балалар баҡсаһына йөрөткән өсөн, уҡыған өсөн, ятаҡта йәшәгән өсөн дә түләргә кәрәк. Ауылда эшһеҙ ҡалған атайым менән әсәйем дә миңә ярҙам итерлек хәлдә түгел инеләр. Мин икенсе курсты ноябргә тиклем генә уҡыным да, Сорғот ҡалаһына сығып киттем. Унда эшемде ойоҡбаш, бейәләй бәйләп һатыуҙан башланым һәм яйлап-яйлап кешеләр менән аралаша-таныша килә, үҙемдең яңы тормошомдо башланым. Әле унда йорт төҙөп бөтөрөп киләм. Йортом янында дауаланырға килеүселәрҙең машиналары йыйылып китә. Ханты-Манси округынан ғына түгел,



Өфөнән, Ҡазандан, Мәскәүҙән дә, Германиянан да, Чехиянан да, Американан да киләләр. Яңыраҡ Төркиәгә барғайным, пациенттарым мине унда ла эҙләп тапты.

### Ниәт көсө

Кешене доғалар әйтеп өшкөрөп дауалайым. Ғәрәп теленә, доғаларға үҙ аллы өйрәндем. Йылдан-йыл ниәттең ниндәй көскә эйә булыуына нығыраҡ инана барам. Етди проблема менән берәр кеше килеп, уны доға, өшкөрөү ярҙамында ғына һауыҡтырыу мөмкин булмаған осраҡта мин уның һауығыуын, ниәт итеп әйтеп, Хоҙайҙан һорайым. Ярҙам итә, әммә ниәт иткән кешенең күңел сафлығы, ихласлығы ғына булһын. Ниәт көсөнөң ҡеҙрәте шул тиклем ҙур, ул хатта әҙәм балаһына тел асҡыстары ла бирә.

Беҙҙең күп кенә проблемаларыбыҙ, атап әйткәндә, ауырыуға дусар булыуыбыҙ, динһеҙлегебеҙҙән, үҙебеҙгә исемен телгә алыу менән ярҙам итергә бойороғо әҙер тороусы Хоҙайҙы һанға һуҡмауҙан килә. Изге ниәтте Ул шундуҡ ишетә һәм тормошҡа ашырырға бойора.

### Ололар фатихаһы кәрәк

Бала сағымда өйөбөҙгә килгән әбейҙәргә ҡоймаҡ ҡойоп, сәй эсермәйенсә ҡайтармай торғайным. Бының менән уларҙың фатихаһын алырға тырышҡанмындыр инде. Хәҙер шуны аңлайым: уларҙың фатихаһы миңә нык ярҙам итә. Ауылдаштарыма, ауылыма рәхмәт йөҙөнән мәсет төҙөү уй-ниәте минең күңелдә күптән йәшәй ине. Быйыл бына шул ниәтемде бойомға ашыра башлау форсаты сыҡты.

Миңә балалар күп килә. Һәр бала изге фәрештә бит ул. Һәр ваҡыт балаларҙы шатландырырға тип ашҡынып йәшәйем. Мин ҡала урамдары буйлап йәйәүләп йөрөргә яратам. Сорғотта урам буйлап атлап барғанда юлымда балалар осраһа, һәр ваҡыт тәм-том йә аҡса таратам. Балалар ни тиклем ҡыуана, шул тиклем сауабына ла ирешәһең бит инде. Сорғоттағы балалар йортона, мәктәптәргә матди ярҙам күрһәтеп торам. Киләсәктә үҙемдең тыуған яҡта, Һаҡмар йылғаһы буйында балалар һауыҡтырыу үҙәге төҙөү уйы менән янам. Беҙ әле йомшаҡ һыулы, мөғжизәле балсыҡлы был йылғабыҙҙың кешене һауыҡтырыр сифатын аңлап бөтөрмәйбеҙ.

Ҡыҙым Руфинаға туғыҙ йәш. Сит яҡта йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, ул башҡортса матур һөйләшә. Ҡыш көнө атайым менән әсәйемдең Сорғотта булыуы ла быға булышлыҡ итәләр, күрәһең. Ҡалала йәшәүсе башҡорттар, татарҙар миңә күренергә килһә, мин уларҙың барыһы менән дә үҙебеҙсә, башҡортса аралашам. Ҡыҫҡаһы, ҡыҙым үҙебеҙҙең милли мөхиттән айырылмай, уны тойоп йәшәй. Ҡулдары минеке кеүек эҫе ҡыҙымдың. Һуңғы ваҡытта уның да кешенең ауырыуын тойоу һәм дауалау һәләте асылып килә.

**Әмир ҒҮМӘРОВ**

**яҙып алды.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Рита туғанымдың беҙгә һәм ауылдаштарыбыҙға күрһәткән мөғжизәләре бик күп инде ул, - тип йомғаҡлап ҡуйҙы һүҙебеҙҙе ауыл мәктәбе уҡытыусыһы Камил Илембәтов. - Әммә быйыл Ураҙа айында күрһәткән мөғжизәһе - Әбештә, ниһәйәт, мәсет төҙөлә башлауы - мөғжизәнең мөғжизәһе инде ул. Мәсет төҙөлөү мөмкин булған ваҡыттан алып ике тиҫтәнән ашыу йылдар үтте, Башҡортостанда һәм Рәсәй илебеҙҙә күпме ауылдар мәсетле булып та, ауылыбыҙҙа һаман да мәсетебеҙ булмауы күңелебеҙҙе ҡырып килде, дөрөҫөн әйткәндә, беҙгә, ирҙәргә, бының өсөн оят ине. Бөгөн был эшкә ҡыҙ балаһы, Рита туғанымдың тотоноуы ұғата ҡыуанкслы. Алла бойорһа, Ҡорбан байрамына мәсетебеҙ, эсенә инеп, намаҙ уҡырлыҡ рәүеш алыр тибеҙ. Иншалла! Ошо көндәрҙә Рита туғаныма 30 йәш тула. Уны байрамы менән ҡотлайым, бәхет теләйем!"**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



Бала тыуғанда унының һелтеле мөхите була (pH=7,4 берәмек) һәм ул үҫә килә кәмей бара. Организмда нисек итеп нормаль һелте мөхите булдырырға һәм барлыҡ ошо агрессив факторҙарҙан һаҡланырға? Әйҙәгеҙ, барлыҡ ошо һөжүмдән: бәшмәктәрҙән, һыуыҡ алдырыуҙан, эренле яралар, герпес, йүтәл, сәсәмә һ.б. арындырған өләсәйҙәрҙең боронғо дауаһын иҫебеҙгә төшөрәйек. Әгәр иҫләһәгеҙ, өләсәйҙәр барлыҡ ошо һәм башҡа осраҡтарҙа аш содаһы һалынған эҫе һөт эсерә ине һәм барлыҡ сырхауҙар ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыға торғайны. Аш содаһы организмдың әсеүен бөтөрә, уға кәрәкле һелте мөхитен булдыра һәм бәшмәктәр, вирустар, паразиттар һ.б. үрсей алмай!

Медицина көрәштең альтернатив ысулын тәҡдим итте: вирустарҙы, бәшмәктәрҙе, паразиттарҙы һәр ҡайһыһын айырым (бер ҡосаҡ дарыу) юҡ итергә... Ә өләсәйҙәрҙең универсаль дауалау сараһы хаҡында оноттолар!

Аш содаһы шулай уҡ организмдан ҡурғашты, кадмийҙы, терегөмөштө, таллийҙы, барийҙы, висмутты һәм, ағыулы булараҡ, онкологияның үҫешен ҡуҙғытҡан башҡа ауыр металдарҙы сығара, радиоактив изотоптарҙы сығарыуға, радиоактив зарарланыуҙан һуң организмды тергеҙеүгә ярҙам итә.

Шулай итеп, вирустар, бәшмәктәр, паразиттар, стафилококктар һ.б. тыуҙырған яман шештән дауаланыу, шулай уҡ башҡа бик күп ауырыуҙарҙан арыныу өсөн организмдың һелтеле балансын тергеҙергә, унең "сереүенән" арынырға кәрәк! Бының өсөн шулай уҡ организмды ныҡ әсетеүсе теләһә ниндәй спиртлы эсемлектәрҙән һәм иттән баш тартырға кәрәк.

Организмдың әсегәнме, юҡмы икәнлеген индикаторлы ябай лакмус ҡағыҙын төкөрөклəп тә белергә була. Әгәр индикатор pH-ты 7 - 7,5 кимәлендә күрһәтә икән, организмығыҙҙа идеаль мөхит! Әгәр 6,5-тән кәм икән, тиҙ арала профилактика саралары күрергә кәрәк. Әгәр 5,5-тән кәмерәк икән, бындай организмды серей башлаған алма менән генә сағыштырырға мөмкин.

Аш содаһын ас ҡарынға, ашар алдынан 20-30 минут алда эсергә кәрәк. Башта бәләкәй дозанан башлау - 1/5 сәй ҡалағы аш содаһын бер стакан эҫе (ҡайнар түгел) һөттә (һыуҙа) болғап, көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә. Артабан дозаны 1/2 сәй ҡалағы күләменә еткерергә.

Бик йыш онкологияны организмдың һаҡланыу функцияларын туплау иҫәбенә (стресс ситуациялары булдырып), төрлө ағыуҙар (болиголов, морозник һ.б.) ҡабул итеп дауаларға тырышалар. Әгәр организмдың ныҡлыҡ резервы ҙур икән - бының ярҙам итеүе, резерв юҡ икән, киреһенсә, организмдың интоксикацияһын тиҙләтеүе лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта бындай препараттарҙы көн һайын ҡабул иткәндә организм уларға өйрәнеп, һаҡланыу функцияларын тупламай башлай. Шул сәбәпле, көн һайын һалҡын һыу менән ҡойонғанда организм һыуыҡҡа өйрәнә һәм уны тулыһынса инҡар итә башлай. Шуға күрә "морж"дарҙа йыш ҡына ике яҡлап та үпкәнең шешеүе, бронхит һ.б. күҙәтелә.

Һаҡлау функцияларын эшләтеү өсөн организм көслө стресс кисерергә тейеш, тимәк, һыуыҡ һыу менән көн һайын түгел, ә бер нисә көн аша ҡойонорға кәрәк!

Стресс ваҡытында организм генетик кодҡа яраҡлылыҡҡа тест-контроль уҙғара, тайпылыш тапһа (вирустар, стафилококктар, ауырыу күҙәнәктәр) уларҙы юҡ итә.

Беҙ яман шештең барлыҡҡа килеүенең тәүге сәбәбен генә - эске агрессив мөхит - ҡараныҡ. Бынан тыш, күҙәнәктәр тышҡы агрессив мөхит - ауралағы кире энергия менән туҡланып та яман шешкә әйләнеүе мөмкин.

Әгәр кеше үпкәләй, асыулана, ярһый, үсегә, ауpаһын кире энергия менән тултыра икән, бындай энергия менән туҡланыусы күҙәнәктәр ҙә агрессивҡа әйләнә!

Бер ир (үҙе әйтеүенсә, тотороҡһоҙ, ҡыҙыу була) онкология диагнозы менән дауаханаға эләгә һәм унда оҙаҡ ваҡыт ята. Һуңынан уны өмөтһөҙ тип сығаралар. Ә ул Тәүрат ала ла урманға йәшәргә китә (был хәл йәйгеһен була). 2,5 айҙан һуң бөтөнләй икенсе: шәфҡәтле, мәрхәмәтле һәм мөхәббәтле кеше булып ҡайта! Һәм унда бер ниндәй ҙә онкология тапмайҙар! Ошо ваҡыт эсендә ул тәбиғәт менән тулы гармонияла йәшәй, шишмә һыуы эсә, тәбиғи аҙыҡтар ашай, цивилизациянан, йәмғиәттән алыҫта була һәм ауpаһын мөхәббәт менән тултыра! Мөхәббәт барлыҡ кире энергетиканы ыңғайға әйләндерә! Күҙәнәктәр, мөхәббәт энергияһы менән туҡланып, агрессив булыуҙан туҡтай, кеше һауыға!

Шулай итеп, кешенең психоэмоциональ торошо бик мөһим! Тәбиғәткә мөмкин тиклем яҡыныраҡ булырға - шишмә сылтырауына, йомшаҡ ҡына ел иҫеүенә, усаҡтың серле ялҡынына, ҡоштарҙың моңло тауышына, сәскәләрҙең хуш еҫенә, ерҙәге үләндәргә һәм бөжәктәргә - барыһына ла ҡыуанырға һәм бөтөн донъяны мөхәббәт менән тултырырға кәрәк!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

**(Дауамы. Башы 31-се һанда).**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЯМҒЫР ЯУМАЙ ИКӘН...

## сәбәбен үҙеңдән дә эҙлә

**Йәй башланһа, кешеләр тәбиғәттән ямғыр көтә. Бигерәк тә ауыл хужалығы менән бәйле кешеләр ямғырға мохтаж. Ялан-ҡырҙарҙа, баҡсаларҙағы уңыштың яҙмышы ямғыр яуыуға бәйле икәнен һәр кем белә. Ләкин ни өсөн ямғыр ваҡытында яумай икәнлеген бер кем дә асыҡлай алмай. Ямғыр яумауында беҙ, ошо төбәктә йәшәгән кешеләр үҙебеҙ ғәйепле икәнен берәү ҙә башына индереп сығармайҙыр.**

Тәбиғәт менән Аллаһы Тәғәләнең бойороғо буйынса олуғ фәрештә Микаил идара итә. Аллаһ үҙе ҡайҙа теләй, шул төбәктә ямғыр яуҙырырға ҡуша фәрештәһенә. Бына шулай, Ер шарында булып торған һәр төрлө ыңғай һәм тиҫкәре күренештәр (көслө ел-дауылдар, боҙ яуыу, һыу баҫыу, сатлама һыуыҡтар, түҙеп торғоһоҙ эҫелек) барыһы ла Юғары көс бойороғо ярҙамында башҡарыла. Был бойороҡто үҙгәртергә бер кемдең дә хәленән килмәй. Ләкин Уны танып, Унының ҡушҡандарын үтәп йәшәгән төбәктәге халыҡты Хоҙай ҙа ярата, шул төбәккә мәрхәмәтен юллай. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙең ямғыр, мул уңыш һорап ялбарыуын көтә.

Дини китаптарҙа ямғыр һорап, ғибәҙәт ҡылығыҙ, тип әйтелә. Үҙен танытыу өсөн Аллаһ ҡайһы бер төбәктәргә һынау ебәрә - ҡоролоҡ, һыу баҫыу, аслыҡ һәм башҡалар. Әлеге лә баяғы, бәндәләрҙең ялбарыуын ярата ул. "Һеҙ миңә ҡарай атлап килһәгеҙ, мин һеҙгә ҡаршы йүгереп килермен", - ти ул. Әммә ләкин кешеләр быны аңламай, сөнки Аллаһты иҫкә алырға онота.

Аллаһы Тәғәләнән ямғыр һорауҙы ойоштороу - иң тәүҙә мәсет имамының бурысы. Ләкин күптәр был эштән йыраҡ тора, бының сәбәбе - дини ғилемдең һайыраҡ булыуындалыр, минеңсә. Күптәре төбәктәренең йәшәйеше, ауыл хужалығының киләсәге, иҡтисады менән дә ҡыҙыҡһынмай. Шул уҡ район имам-мөхтәсибе, тейеш булһа ла, ауыл имамдарын уҡытыу, шәриғәт тәртиптәренә өйрәтеү кеүек эштәрҙе ойошторомай. Әйтеүе лә оят, әммә ҡайһы бер имам-мөхтәсибтәр дини белем буйынса ауыл имамдарынан да түбән кимәлдә. Ҡайһы берәүҙәр хатта йома намаҙын да уҡытырлыҡ кимәлдә түгел. Ғилемле, ғәмле булырға ине, йәмәғәт.

Ә ямғыр һорау тәртибенә килгәндә, ул бер аҙ ҡатмарлыраҡ, әммә китаптарҙа ул бик асыҡ, асыҡ итеп өйрәтелгән. Был эшкә яуаплы ҡараһаҡ, Хоҙай ҡушҡан ғәмәлдәрҙе үтәһәк, ҡоролоҡ ҡурҡыныс булмаҫ.

**Исмәғил хәҙрәт ХӘКИМ.**

**Учалы ҡалаһы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Туҡланыуҙан күп нәмә тора

**Энергетик резервтарығыҙҙы асып, ысын тормош көсөгөҙҙө күрһәтегеҙ. Бының өсөн түбәндәге кәңәштәрҙе тотоғоҙ.**

**Һыу күп булған аҙыҡ ашағыҙ.**

Беҙҙең планетабыҙ, тәнебеҙ кеүек үк, 70 процент һыуҙан тора. Шуға күрә, организмығыҙҙы тейешенсә таҙартыу һәм уларҙың максималь эшмәкәрлеген тәьмин итеү өсөн диетағыҙ 70 процентҡа һыу күп булған аҙыҡ-түлектән (йәшелсә-емештәр) торорға тейеш. Организмдың өс циклы ла һыуҙы ошо сығанаҡтарҙан даими алғанда (ҡайһы бер теориялар тәҡдим иткәнсә, көнөнә һигеҙ стакан һыу эсергә кәрәк, ләкин йәшелсә-емеш ашағанда бының зарурлығы юҡ) яҡшыраҡ эшләй.

**Өс цикл буйынса йәшәгеҙ.**

Һыуға бай тере аҙыҡтарҙы ашай башлағас, туҡланыуығыҙҙы циклдарға тап килтерергә тырышығыҙ. Иртән (көн үҙәгенә тиклем), тән токсиндарҙан һәм башҡа шлактарҙан арынырға теләгәндә, бары тик емеш-еләк кенә ашағыҙ. Был организмды таҙартыу һәм унан зарарлы матдәләрҙе сығарыу процесын тағы ла һөҙөмтәлерәк итер. Көн үҙәгенән һуң ашарға ла мөмкин (диетаның 70 процентын йәшелсә, еләк-емеш алып торорға тейешлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ). Киске сәғәт һигеҙҙән һуң ашау ярамай, ашайһығыҙ икән, һеҙ аш һеңдереү процесын боҙоп, системаны ҡамауҙа тотаһығыҙ (энергия бер кемгә лә кәрәкмәгән аш эшкәртеү процесына сарыф ителәсәк). Әгәр ошо ҡағиҙәне үтәһәгеҙ, йоҡоғоҙ ҙа яҡшырыр.

Иғтибарға лайыҡ икенсе идея булып күп быуаттар дауамында күп илдәрҙә таралған ураҙа традицияһы тора. Ураҙа (пост) - сәләмәтлекте нығытыу ысулы ғына түгел, ул шулай уҡ ихтыяр көсөн нығытыу өсөн дә бик яҡшы.

Нисек кенә булмаһын, вегетариан диетаһының өҫтөнлөгөн үҙегеҙҙә лә һынап ҡарай алаһығыҙ. Финляндияла үткән тикшеренеүҙәрҙә ғалимдар шуны асыҡлаған: "яңы" вегетариандарҙың 38 проценты ошо диетаға күскәндән һуң ете ай үткәс аҙыраҡ арый һәм йәшәү дәртен күберәк тоя. Әлбиттә, бер сиктән икенсеһенә бәргеләнергә, әгәр ул тормош рәүешегеҙҙе ныҡ үҙгәртә икән, ит ашауҙы кинәт туҡтатырға ярамай. Бары тик ит продукттарын ашауҙы кәметегеҙ һәм яҡшы емеш-еләккә өҫтөнлөк бирегеҙ. Итһеҙ ҙә бына тигән тәмле блюдолар тәҡдим иткән милли кухняларға күсегеҙ (итальян, ҡытай, һинд, япон, тайвань һ.б.). Беҙҙең йәмғиәттең бәләһе - энергия булмауында. Күпселек кеше даими рәүештә үҙҙәрен ябыҡтырып, автопилот режимында йәшәй.

Диетағыҙҙа күберәк һыуҙан торған продукцияға өҫтөнлөк биреп, һеҙ йәшәү энергияғыҙҙы һәм аң зирәклеген күтәрәсәкһегеҙ. Тормоштан һәр саҡ теләгән ҡәнәғәтлекте аласаҡһығыҙ, һөҙөмтәлә хыялығыҙҙағы тормошта йәшәйәсәкһегеҙ!

**Робин ШАРМА.**



## 13 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Сердце Марии", 24-я серия
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "ЖКХ"
16.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
17.00 "Три жизни" Евгения Евстигнеева"
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дом образцового содержания". Сериал
22.35 "Судьба на выбор", 1-я серия
23.35 "Не оглядывайся". Драма
01.40, 03.05 "Драконий жемчуг: эволюция"
03.00 Новости
03.15 "Я - супермен"
04.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 106-я серия
15.45 "Кровинушка", 131-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Детективное агентство "Иванда-Марья". "Дело об испытательном сроке". Детективный сериал
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир"
21.30 "Цвет черемухи", 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал
23.20 "Городок"
00.20 "Вести+"
00.40 "Верность подранка. Николай Губенко". Док. фильм
01.50 "Скрой у всех на виду". Драма
03.40 "Комната смеха"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.05 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив"
14.35 "Средь бела дня" с Виктором Набутовым"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
